БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ МӘҒАРИФТЫ ҮҪТЕРЕҮ ИНСТИТУТЫ

# ХӘҘЕРГЕ ЗАМАН БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕН ПРОЕКТЛАУ

*Методик кәңәштәр*

Өфө - 2015

УДК 811.512.141
ББК 74.268.1 Баш
И 48

*БРМҮИ УМС тарафынан тәҡдим ителгән*
*Протокол № 6, 21.04.2015 й.*

**Хәҙерге заман башҡорт теле дәрестәрен проектлау:** Методик кәңәштәр. – Өфө: БР МҮИ нәшриәте, 2015. – 44 бит.

*Төҙөүсеһе: Илмөхәмәтов Ә.Ғ.,* ф.ф.к., БР МҮИ-ның башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһы доценты

Методик кәңәштәр Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына ярашлы заманса дәрестәрҙе проектлау буйынса башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙам итеү маҡсатынан сығып төҙөлгән. Бында уҡыусыларҙың психо-физиологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып дәрестәрҙе проектлау буйынса эшмәкәрлек алгоритмы тәҡдим ителә, шулай уҡ дәрестәрҙе анализлауға һәм үҙанализға ҙур иғтибар бүленә. Методик кәңәштәр уҡытыусылар һәм аттестация комиссиялары эксперттары өсөн ғәмәли йүнәлешеле әсбап булараҡ ҡулланыла ала.

*Рецензенттар:*
*Йәнмырҙина Р.Р.*, ф.ф.к., БДУ-ның башҡорт һәм журналистика факультетының башҡорт тел ғилеме һәм этно-мәҙәни белем биреү кафедраһының өлкән уҡытыусыһы;
*Сөләймәнов Р.Ф.,* БР МҮИ-ның башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһының өлкән уҡытыусыһы.

**© Ильмухаметов А.Г.(сост.), 2015.**

**© Изд-во ИРО РБ, 2015.**

# ХӘҘЕРГЕ ЗАМАН БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСЕНЕҢ СТРУКТУРАҺЫ

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына ярашлы башҡорт теленән дәрескә әҙерләнгәндә, тәү сиратта нимәләрҙе күҙ уңында тоторға һуң?

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының төп үҙенсәлеге – уларҙың эшмәкәрлеккә ҡоролған белем биреү һәм уҡыусы шәхесен үҫтереүгә йүнәлтелгән булыуы. Хәҙерге заман белем биреү системаһы уҡытыу һөҙөмтәләрен билдәле белемдәр йыйылмаһы итеп ҡарауҙан баш тартып, реаль эшмәкәрлек төрҙәрен формалаштырыуға йөҙ тота. Йәғни, белем биреүҙән тыш, был белемдәрҙе ғәмәлдә ҡулланырға өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының методологик нигеҙен шәхесте үҫтереүгә, гражданлыҡ тойғоһон формалаштырыуға йүнәлтелгән системалы-эшмәкәрлекле белем биреү алымдары тәшкил итә. Системалы-эшмәкәрлекле белем биреү алымдары уҡыусылар үҙләштерергә тейешле универсаль уҡыу эшмәкәрлеге һәм төп бурыстарҙан сығып, белем биреүҙең мөһим һөҙөмтәләрен айырып алырға мөмкинлек бирә. Мәғариф системаһында мәктәп уҡыусыһының шәхесе үҫеше, иң тәү сиратта, уҡыу-уҡытыу, тәрбиә процесының нигеҙе булараҡ сығыш яһаусы универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу аша тәьмин ителә. Уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлек төрҙәрен үҙләштереүҙәре уларға артабан үҙ аллы яңы белемдәр алырға, шулар аша компетенцияларын үҫтерергә, индивидуаль белем алыу траекторияһын ойошторорға мөмкинлектәр тыуҙыра.

Бөгөнгө белем биреү процесында уҡыусыларҙың үҙ аллы белем ала (таба), кәрәкле мәғлүмәт туплай, гипотеза тәҡдим итә, һығымталар яһай белеүҙәрен формалаштырыусы алымдарҙы һәм методтарҙы ҡулланыу проблемаһы актуаль булып ҡала. Йәғни бөгөнгө уҡыусыла унның үҙ аллы белем ала белеүен тәмьин итеүсе универсаль уҡыу эшмәкәрлеге формалашырға тейеш. Шуға күрә лә белем алыуҙы ойоштороуҙа алға ҡуйылған бурыстарҙы һәм килеп тыуған мәсьәләләрҙе сисеүгә йүнәлтелгән системалы-эшмәкәрлекле белем биреү ысулдары уңышлыларҙан һанала.

Бөгөнгө мәғариф системаһы – мәктәп – мәғлүмәт сығанағы булыуҙан бигерәк белем алырға өйрәнеү үҙәгенә әүерелә. Бында уҡыусы белем алырға өйрәнә, ә уҡытыусы был процесты ижади ойоштороусы оло иптәш, ярҙамсы булараҡ сығыш яһай. Әлеге бурыстар уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлектәрен формалаштырыу аша тормошҡа ашырыла ла инде. Универсаль уҡыу эшмәкәрлектәре (шәхсән, танып белеү, регулятив һәм коммуникатив) – дөйөмләштерелгән эш-хәрәкәттәр, уҡыусыларҙың донъяны танып белеүен, белем алыуға ынтылыштарын тәьмин итә, ҡыҙыҡһыныуҙарын ҡандыра. Уҡыусыларҙың алған белемдәре уларҙың үҙ

эҙләнеүҙәре, эшмәкәрлектәре һөҙөмтәһе булһын өсөн был эҙләнеүҙәрҙе, танып-белеү эшмәкәрлеген ойошторорға (ойоштора белергә), был эшмәкәрлек йәки процесс менән идара итергә, уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре артабан үҫтерергә кәрәк.

Бөгөнгө көндә яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттары заманса дәрестәргә дөйөм талаптар билдәләй:

- яҡшы йыһазландырылған кабинетта ойошторолған яҡшы дәрес һәйбәт башланып, һәйбәт тамамланырға тейеш;
- уҡытыусы дәрестең темаһын, маҡсатын, бурыстарын аныҡ формалаштырып, үҙенең дә, уҡыусыларының да эшмәкәрлеген планлаштыра;
- дәрес ниндәй ҙә булһа проблеманы хәл итеүгә ҡоролған һәм үҫтерешле булырға тейеш: уҡытыусы үҙе лә уҡыусылар менән хеҙмәттәшлеккә ынтыла һәм шул уҡ ваҡытта уҡыусыларҙы ла уҡытыусы һәм класташтары менән хеҙмәттәшлеккә йүнәлтә белә;
- уҡытыусы проблемалы һәм эҙләнеү ситуациялары ойоштора, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә;
- уҡыусылар үҙҙәре һығымта яһай;
- дәрес ижади мөхиттә үтә;
- ваҡытты һәм һаулыҡты һаҡлау талаптары үтәлә;
- иғтибар үҙәгендә – уҡыусылар;
- уҡыусыларҙың белем кимәлен һәм мөмкинлектәрен иҫәпкә алып эш материалы һайлана;
- уҡыусыларҙың психофизиологик, индивидуаль, кластың профиль үҙенсәлектәрен, кәйеф-тороштарын иҫәпкә алына;
- уҡытыусының үҙ методик оҫталығын күрһәтә, файҙалана белеүе мөһим;
- кире бәйләнеш булдырыу;
- дәрес ыңғай психологик мөхиттә үтергә тейеш.

Яңы шарттарҙа уҡытыусы түбәндәге педагогик техника принциптарына таянып эшләргә тейеш:

- һайлау ирке (белем биреүсе йәки етәксе эшмәкәрлектә уҡыусыға һайлау хоҡуғы бирелә);
- асыҡлыҡ (белем биреп кенә ҡалмай, уның сиктәрен дә күрһәтеү, уҡыусыны сиселеше өйрәнелеүсе курс сиктәренә сыҡҡан проблемалар алдына ҡуйыу);
- эшмәкәрлек (уҡыусылар тарафынан белемдәрҙең эшмәкәрлек формаһында үҙләштерелеүе, йәғни уҡыусы алған белемдәрен практикала ҡуллана, файҙалана белергә тейеш);

- идеаллыҡ (эшмәкәрлектең юғары һөҙөмтәлелеге, уҡыусыларҙың үҙ мөмкинлектәрен, белемдәрен, ҡыҙыҡһыныуҙарын максималь файҙаланыу);
- кире бәйләнеш (белем биреү процесын кире бәйләнеш ысулдары системаһы ярҙамында контролдә тотоу).

Бөтә белем биреү процесы хеҙмәттәшлеккә нигеҙләнгән эшмәкәрлеккә ҡоролған булырға тейеш. Уҡыусы был процестың әүҙем ҡатнашыусыһы булғанда ғына ул эшмәкәрлеккә йәлеп ителеп, юғары сифатлы төплө белемгә эйә була. Яңы стандарттарға ярашлы дәрестә уҡыусының тирә-яҡты танып белеүгә мотивацияһын булдырыу зарур, уға мәктәптә алған белемдең тормоштан айырмалы рәүештә алынған булмауын, ә киреһенсә, шәхес булараҡ тормошҡа әҙерләнергә, уны танып белергә, тейешле мәғлүмәтте эҙләп табырға булышлыҡ итеүен күрһәтеү мөһим. Тапҡан белемдәрҙе һәм күнекмәләрҙе реаль тормошта ҡулланыу мөмкинлектәрен күрһәтеү ҙә талап ителә.

Яңы стандарттар уҡыу ситуацияһы тигән яңы термин индерә, был белем биреү процесының шундай айырым берәмеге - уҡыусылар уҡытыусы ярҙамында үҙҙәренең эшмәкәрлек предметын билдәләйҙәр, төрлө уҡыу эшмәкәрлеге ярҙамында уны тикшерәләр, үҙгәрештәр индерәләр (мәҫәлән, формулировкаһын үҙгәртәләр, йә үҙҙәренсә тасуирлайҙар һ.б., өлөшләтә уны хәтерҙә ҡалдыралар). Уҡытыусы алдына айырым белем алыу эшмәкәрлеге берәмеге булараҡ уҡыу ситуацияһын барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ белем биреү бурыстарын уҡыу ситуацияһына әйләндерә белеү бурысы ҡуйыла.

Уҡыу ситуацияһын барлыҡҡа килтереү түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алырға тейеш:

- уҡыусының йәш үҙенсәлеге;
- уҡыу предметының үҙенсәлеге;
- уҡыусыларҙа универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең формалаштырыу.

Предмет һөҙөмтәләренән тыш, уҡыусыларҙың метапредмет һөҙөмтәләрен дә уңышлы формалаштырыу өсөн бөгөн дәресте нисек төҙөргә һуң?

Ғәҙәттә традицион рәүештә уҡытыу процесының биш принцибын билдәләйҙәр (Анри Файол):

- планлаштырыу;
- ойоштороу;
- ғәмәлгә ашырыу һәм контроль;

- коррекция;
- анализ.

Уҡыу-уҡытыу процесының төп формаһы булараҡ, бөгөн дә дәрес ошо уҡ принциптарға нигеҙләнә. Уҡытыусы быға тиклем дә, бөгөн дә дәресен алдан планлаштырырға, уны ойоштороуҙо ныҡлап уйларға, алып барырға, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген баһаларға, кәрәк булғанда төҙәтмәләр индерергә, анализ яһарға, контроль-баһалау эштәрен үткәрергә бурыслы. Эш практикаһында киң таралған ҡатнаш дәрес миҫалында дәрестә уҡыутыусы менән уҡыусы эшмәкәрлегенә талаптарҙы ҡарап үтәйек:

| Дәрескә талаптар | Традицион дәрес | Заманса дәрес тибы |
|---|---|---|
| Дәрес темаһын иғлан итеү | Уҡытыусы уҡыусыларға хәбәр итә (еткерә) | Уҡыусылар үҙҙәре формалаштыра |
| Маҡсатты һәм бурыстарҙы хәбәр итеү | Уҡытыусы формалаштыра һәм уҡыусыларға нимәгә өйрәнергә тейеш булыуҙарын хәбәр итә (еткерә) | Белгәндәренең һәм белмәгәндәренең сиген билдәләп, уҡыусылар үҙҙәре формалаштыра |
| Планлаштырыу | маҡсатҡа ирешеү өсөн, уҡытыусы уҡыусыларға ниндәй эштәр башҡарырға тейеш икәндәрен хәбәр итә | Уҡыусылар тарафынан ҡуйылған маҡсаттарға ирешеү юлдары билдәләнә |
| Уҡыусыларҙың практик эшмәкәрлеге | уҡытыусы етәкселеге аҫтында уҡыусылар практик эштәр башҡара (ғәҙәттә фронталь ысул менән) | Уҡыусылар үҙҙәре билдәләгән планға ярашлы белем алыу эшмәрлеген тормошҡа ашыра (индивидуаль һәм төркөм) |
| Контролде тормошҡа ашырыу | Уҡытыусы уҡыусылар тарфынан практик эштәрҙең башҡарылыуын контролдә тота | Уҡыусылар контролде тормошҡа ашыра (үҙконтроль, үҙ-ара контроль формалары ҡулланыла) |
| Коррекцияны тормошҡа ашырыу | Уҡытыусы уҡыусыларҙың эштәрҙе башҡарыу барышында һәм һөҙөмтәләре буйынса коррекцион эштәр үткәрә | Уҡыусылар килеп тыуған ауырлыҡтарҙы үҙҙәре хәл итергә тырыша |
| Баһалау | Уҡытыусы уҡыусыларҙың дәрестәге эштәрен баһалай | Уҡыусылар һөҙөмтәһенә ҡарап эшмәкәрлеккә баһа бирәләр |

| | | |
|---|---|---|
| Йомғаҡлау | Уҡытыусы уҡыусыларҙың нимәне иҫтә ҡалдырыуҙарын асыҡлай | Рефлексия үткәрелә |
| Өйгә эш | Уҡытыусы иғлан итә һәм аңлата (ғәҙәттә барыһына ла бер үк эш) | Уҡыусылар үҙ мөмкинлектәренән сығып тәҡдим ителгән эш төрөн һайлап ала |

Килтерелгән ике дәрес тибынан күренеүенсә, улар, беренсе сиратта, уҡытыусының һәм уҡыусының дәрестәге эшмәкәрлеге буйынса бер-береһенән айырыла. Традицион типтағы дәрестәге уҡытыусы ҡушҡанды ғына үтәп ултырыусынан уҡыусы хәҙер инде төп эшмәкәргә, ижадсыға әүерелә.

Дәрескә әҙерлек бөгөнгө көндә лә бөтә уҡытыусыларға таныш дәрес этаптарына нигеҙләнә. Был дәрестең маҡсатын һәм бурыстарын билдәләү; уҡыу-уҡытыу материалының йөкмәткеһен һайлап алыу; уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу формаларын билдәләү; уҡытыу алымдарын һәм методтарын һайлап алыу; өйгә эш материалын һайлау; контроль ысулдарын билдәләү; уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген баһалау өсөн дәрестә урын һәм ваҡытын уйлау; йомғаҡлау өсөн һорауҙар һайлау, рефлексия ысулдарын билдәләү һәм башҡалар.

Ләкин хәҙерге заман дәресенә әҙерлек ваҡытында уҡытыусы һәр этапҡа эш формаларын, методтарын, уҡыу материалы йөкмәткеһен, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу ысулдарын һайлағанда тәнҡит күҙлегенән ҡарап уҡыусы менән уҡытыусы тиң хеҙмәттәшлек итергә тейеш булыуҙан, емешле ижад итеү мөмкинлектәрен тыуҙырыу кәрәклегенән сығып эш итергә, йәғни үҙенең һәм уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген алдан билдәләп, педагогик хеҙмәттәшлек йөкмәткеһен планлаштырырға бурыслы. Уҡыусының эшмәкәрлеге өс яҡлап та иҫәпкә алынырға һәм танып белеү, коммуникатив һәм регулятив һөҙөмтәләргә ирешеүгә йүнәлтелгән булырға тейеш.

Дәрескә әҙерләнгәндә иң ҡатмарлыһы – уҡыу материалының йөкмәткеһен һәм уҡытыу (белем биреү) методтарын һайлап алып, оптималь ҡулланыу. Уңышлы дәрес структураһын түбәндәге шарттар тәьмин итә:

- белем биреүсе, тәрбиә һәм үҫеш маҡсаттарын комплекслы планлаштырыу;
- дәрес йөкмәткеһендә һәм темала төп, мөһим материалды айырыу;
- дәрес этаптарының маҡсатҡа ярашлы эҙмә-эҙлеклелеген билдәләү, материалды үҙләштереүҙең, эшмәкәрлек төрҙәренең рациональ бүленешен тәьмин итеү;

- иң ҡулайлы, эффектив методтарҙы, алымдарҙы һәм уҡытыу сараларын һайлау;
- уҡыусыларҙың психо-физиологик, индивидуаль үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу;
- дәрестең ыңғай үтеүе өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу.

Нигеҙҙә, күселек дәрестәр ҡатнаш типта ойошторола (комбинированный). Был осраҡта дәрестең күп ваҡыты (20-30 минут) яңы материалды үҙләштереүгә арналған булырға тейеш. Яңы материал ныҡлы үҙләштерелһен өсөн, уны үтелгән темаларға бәйләп актуалләштереү мөһим. Шуға күрә яңы тип дәрестәрҙең башланғыс өлөшөндә үк белемдәрҙе актуалләштереү, уның үткән темалар менән бәйләнешен асыҡлау, был яңы белемдәрҙең киләсәктә беҙгә ниңә, ҡайҙа, ҡасан кәрәк буласағын билдәләү бик мөһим этаптарҙан һанала. Был, үҙ сиратында, предметҡа һәм темаға ҡыҙыҡһыныуҙы арттыра, мөһимлеген, кәрәклеген аңларға булышлыҡ итә (мотивацияны күтәрә). Уҡытыусы менән уҡыусыларҙың хеҙмәттәшлеге нигеҙендә тыуған эшмәкәрлектә яңы белемдәр үҙләштерелә, практик эш төрҙәрендә нығытыла. Контроль был осраҡта баһалау ысулы булыуҙан бигерәк ике яҡлы "уҡытыусы-уҡыусы" бәйләнешенә әйләнә. Йомғаҡлау рефлексия формаһында ойошторола. Был иң киң таралған ҡатнаш типтағы дәрестең оптималь системаһын тәшкил итә.

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттыры талаптарына ярашлы, заманса дәрескә әҙерлек барышында нимәгә нығыраҡ иғтибар итергә һуң? Беренсе сиратта, алда әйтеп үткән дәрес этаптарын ҡарап үтергә кәрәк. Дәрестең уңышлылығы күпселек осраҡта уҡытыусының уға ни тиклем ентекле әҙерләнеүенә бәйле. Уҡытыусының дәрескә әҙерләнеүен схематик рәүештә ошолай бирергә мөмкин:

***1-се этап*** – уҡытыу программаһын өйрәнеү. Эштең был өлөшө уҡыу йылына әҙерлек ваҡытында уҡ башлана. Бында уҡыу пердметының дөйөм маҡсатына, бурыстарына, көтөлгән һөҙөмтәләренә һәм айырым блок (модуль) темаларҙың маҡсат һәм бурыстарына иғтибар бүленә, һәр теманың программала тотҡан урыны, башҡа темалар менән бәйләнеше өйрәнелә. Уҡыу темаһының үтелгән темалар менән бәйләнешен асыҡлау, киләсәктә үтеләсәк уҡыу материалы менән логик бәйләнешен аныҡлау был теманы өйрәнеүҙең алыҫ һәм яҡын маҡсаттарын, бурыстарын билдәләгәндә ярҙам итәсәк.

***2-се этап*** – методик әҙәбиәт өйрәнеү. Программаға ярашлы үтеләсәк темаларҙы билдәләп сыҡҡас, методик әҙәбиәткә, уҡыу-уҡытыу комплектына (дәреслек, электрон дәреслек, өҫтәмә әҙәбиәт һ.б.) нигеҙләнеп эш программаһы төҙөлә. (Ғәбитова З.М. Эш программаһы эшкәртеү буйынса методик кәңәштәр. Башҡорт теле. – Өфө: БР МҮИ нәшриәте, 2014. – 24 бит.)

***3-сө этап*** – конкрет дәрес материалын дәреслектән өйрәнеү. Дәреслектәге уҡыу материалы йөкмәткеһен өйрәнеп, уҡытыусы, был материалдың уҡыусылары өсөн ауыр-еңеллеген самалай, ҡайһы өлөшөн берлектә, ҡайһынырын үҙ аллы өйрәнеү мөмкинлектәрен асыҡлай. Ауырыраҡ материалды уҡыусыларға еткереү өсөн методтар, алымдар һайлай.

***4-се этап*** – дәрес темаһы буйынса мәктәптә булған белем биреү сарарын барлау һәм әҙерләү. Уҡытыусы мәктәп һәм кабинет китапханаһында тема буйынса өҫтәмә материалдар өйрәнә, техник һәм электрон белем биреү сараларын барлай, төҙөклөгөн тикшерә, ҡарап сыға, дәрестә урынын, ваҡытын, маҡсатын билдәләй.

Дәрестең тематик планда тотҡан урынынан сығып, унын төрө, дөйөм маҡсаты һәм бурыстары билдәләнә. Дәрестең маҡсатын дүрт йүнәлештән сығып билдәләйбеҙ: яңы белемдәрҙе үҙләштереү, ғәмәлдә ҡулланырға өйрәтеү, ижади һәләттәрен үҫтереү һәм тәрбиәүи маҡсаттар. Дәрестең маҡсатына ярашлы төрө билдәләнә, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге күҙаллана, күнегеүҙәр, эш төрҙәре һайлап алына, өҫтәмә материал әҙерләнә.

***5-се этап*** – дәрес планын төҙөү. Дәрес планы – уҡытыусының дәрескә әҙерлек эшенең һуңғы һөҙөмтәһе. Ул тематик планға ярашлы дәрестең башҡа темалар араһындағы урынынан сығып төҙөлә. Блок йәки модулдә тотҡан урынынан сығып, төрө билдәләнә, маҡсаттары һәм бурыстары асыҡлана.

Дәрестең үҙенсәлеге һәм сифаты унын маҡсаттарына, йөкмәткеһенә, үткәреү методикаһына, мәктәптең, уҡытыусының һәм уҡыусыларҙың үҙенсәлектәренә бәйләнгән. Уҡытыусылар тарафынан үткәрелгән күп төрлө дәрестәрҙең дөйөм һыҙаттарын билдәләү өсөн уларҙы классификацияларға кәрәк. Яңы быуын Федераль дәүләт белем биреү стандартарына ярашлы, ниндәй маҡсатҡа йүнәлтелгәнлегенә һәм ниндәй һөҙөмтәләр алырға теләүгә ҡарап, дәрестәр түбәндәге типтарға бүленә:

| *Дәрес тибы* | *Маҡсат* | *Уҡытыуҙың һөҙөмтәһе* |
|---|---|---|
| Яңы белемде тәүгә күрһәтеү (яңы белем менән таныштырыу) дәресе | Предмет буйынса яңы белемде тәүге (беренсе тапҡыр) үҙләштереү | Үҙ һүҙҙәре менән ҡағиҙә, төшөнсә, алгоритмдарҙы барлыҡҡа килтереү, өлгө (үрнәк), алгоритм буй-са ғәмәлдәрҙе эшләү |
| Предмет буйынса белемде ҡулланыу дәресе | Ҡатмарлы күнегеүҙәрҙе эшләү өсөн предмет | Айырым уҡыусылар йәки класс коллективы |

| | | |
|---|---|---|
| | буйынса белемде ҡулланыу | тарафынан ҡатмарлы күнегеүҙәр эшләү |
| Һығымта яһау һәм систематизациялау (алған белемде систе-маға һалыу) дәресе | Предмет буйса белем, универсаль эшмәкәрлек-те систематизациялау | Һығымталар буйынса йомғаҡ яһай белеү, уни-версаль уҡыу эшмәкәр-легенең кимәлен күтәреү |
| Ҡабатлау дәресе | Предмет буй-са белемде нығытыу, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу | Айырым уҡыусылар йә-ки класс коллективы та-рафынан күнегеүҙәрҙе хатаһыҙ эшләү; телдән яуап биреү; үҙ хатаңды табыу һәм төҙәтеү; бер-береңә ярҙам итеү |
| Контроль дәрес (тикшереү дәресе) | Практик эштәрҙе башҡа-рыуҙа предмет буйынса белемде тикшереү | Контроль йәки үҙ аллы эштең һөҙөмтәләре |
| Коррекцион (төҙәтеү) дәрес | Хаталар өҫтөндә индивидуаль эш | Үҙ хаталарыңды табыу һәм төҙәтеү |
| Ҡатнаш дәрес | Бер дәрес рамкаларында эшләй алмаған күнегеүҙәрҙе эшләү | Ҡуйылған дидактик бурыстарҙы хәл итеү |
| Белем алыу экскурсияһы | Тирә-яҡ мөхитте, күренештәрҙе яҡындан өйрәнеү | Реаль тормош ситуация-һында тирә-яҡ мөхитте, күренештәрҙе яҡындан өйрәнгәндә предмет бу-йынса белемгә эйә булыу һәм уларҙы ҡулланыу; ижади отчет төҙөү |
| Проекттар эшләү һәм практика дәресе | Теоретик ҡағиҙәләрҙе (положениеларҙы) өйрәнеүҙе практик яҡҡа йүнәлтеү | |

Дәрестәрҙең типологияһы менән бер рәттән хәҙерге методика фәне дәрестең структураһына ла ҙур иғтибар бүлә. Дәрестең структураһы – уның бөтөнлөгөн тәьмин итеүсе бөтә элементтарының берләшмәһе. Дәрестең өлөштәре бер-береһе менән тығыҙ бәйләнә һәм билдәле тәртиптә

эҙмә-эҙлекле төҙөлә. Дәрестең структураһы ҡуйылған маҡсаттарға, өйрәнеләсәк материалдың йөкмәткеһенә, уҡытыу методтары һәм алымдарына, уҡыусыларҙың белем һәм үҫеш кимәленә, уҡытыу процесында дәрестең урынына бәйле. Дәрестәрҙең структураһы күп төрлө, уларҙы тапалған бер ҡалып буйынса ғына үткәрергә ярамай. Үрҙә һанап киткән факторҙарҙан тыш, дәрестең структураһына уҡытыусының ижади потенциалы, конкрет класта конкрет шарттарҙа эшләүе лә тәьҫир итә. Дәрестә ҡулланылған методтар, алымдар, юлдар төрлө бәйләнештә, тәртиптә килергә мөмкин. Заманса башҡорт теле дәресенә белемде үҙләштереү, синтез (тикшеренеү), ҡабатлау һәм нығытыу, белемде тикшереү, практикала ҡулланыу, үҙ аллы эш кеүек элементтарҙың бер-береһенә бәйләнеп килеүе хас.

Яңы стандарттар буйынса бер нисә дәрес төрҙәре (типтары) айырылып ҡаралһа ла дидактик төҙөлөшө структур элементтары (этаптары) уларҙы берләштереп ҡарарға мөмкинлек бирә. Дәрестең төп дидактик структураһы (төҙөлөшө) дәрестең план-конспектында һәм технологик картаһында сағылыш таба. Уның дәрес тибына ҡарап үҙгәргән өлөштәре лә булһа, күп моменттары дөйөм характерҙа.

1. Ойоштороу моменты:

- тема;
- маҡсат, белем биреүсе, үҫтереүсе, тәрбиәүи бурыстар;
- уларҙы ҡабул итеү мотивацияһы;
- планлаштырылған һөҙөмтәләр;
- дәрестең шәхес формалаштырыуға йүнәлтелгән булыуы.

2. Өйгә бирелгән эштәрҙе тикшереү (әгәр бирелгән булһа).

3. Дәрестең төп этабында һәр уҡыусыны әүҙем уҡыу эшмәкәрлегенә әҙерләү:

- уҡыу-уҡытыу маҡсатын ҡуйыу;
- белемдәрҙе актуалләштереү;

4. Яңы материалды еткереү:

- уҡыу-уҡытыу мәсьәләһен сисеү (хәл итеү);
- яңы белемдәрҙе үҙләштереү;
- уҡыусылар тарафынан яңы материалды аңлау кимәлен тикшереү

5. Өйрәнелгән материалды нығытыу:

- белемдәрҙе дөйөмләштереү һәм системалаштырыу;
- контроль һәм үҙконткроль (үҙ аллы эш, йомғаҡлау контроле)

6. Йомғаҡлау:

- дәрес һөҙөмтәләрен диагностикалау;
- маҡсатҡа ирешеүҙе рефлексиялау.

7. Өйгә эш.

Был структур элементтар һәр дәрес төрө (дәрес тибы) өсөн дөйөм мотлаҡ талап түгел, маҡсаттарға һәм бурыстарға ярашлы, улар дәрес планында төрлөсә урын алырға, йәки уҡытыусы тарафынан киңәйтелеүе мөмкин.

Дәрескә үҙанализ һәм анализ яһау

**Дәресте үткәргәндән һуң, уға ентекле анализ яһарға кәрәк. Төплө анализ дәрестең уңышлы йәки уңышһыҙ үтеүен, ҡулланылған эш төрҙәренең һәм методтарҙың эффективлығын билдәләргә ярҙам итә, уҡыусыларҙың потенциалын асыҡлай, перспективаларҙы аса һ.б. Һәр дәрестән һуң уҡытыусы үҙенең дәресенә анализ яһағанда:**

- ҡуйылған маҡсаттарға характеристика бирә һәм уларға ирешеү-ирешмәүҙе анализлай;
- материалдың күләме һәм уларҙы уҡыусыларҙың үҙләштереү сифаты тураһында мәғлүмәт бирә;
- уҡыусылар менән эшләүҙә ҡулланылған методтарға характеристика бирә һәм уларҙы уңышлылығы яғынан баһалай;
- уҡыусыларҙың әүҙемлеген баһалай һәм уларҙың эшмәкәрлеген ойоштороуҙа ҡулланылған алымдарҙың эффективлығын билдәләй;
- үҙ эшмәкәрлегенең айырым аспекттарына баһа бирә (телмәр, логика, уҡыусылар менән мөнәсәбәт булдырыу һ.б.);
- йомғаҡлауҙа уҡытыусы дәрестең сифатын яҡшыртыу буйынса үҙ тәҡдимдәрен әйтә һәм үҙ педагогик оҫталығын камиллаштырыу буйынса саралар билдәләй.

**Коллегалары алдында үҙ дәресенә баһа биргәндә түбәндәге алгоритмға нигеҙләнеп үҙанализ яһай.**

## ДӘРЕСКӘ ҮҘАНАЛИЗ СХЕМАҺЫ

Класс______ ҡатнашыусылар һаны_____ исемлек буйынса_____
Дәрестең темаһы___________________________________________

1. Дәрестең төрө һәм структураһы.
2. Дәрестең тема эсендәге роле нисек? Был дәрес үткәне менән нисек бәйләнгән?
3. Класҡа ҡыҫҡаса педагогик-психологик характеристика (уҡыусылар һаны, ҡатнашыусылар һаны, “көслө” һәм “көсһөҙ” уҡыусылар һаны, уҡыусыларҙың дәрестә әүҙемлеге, дәрескә әҙерлектәре, ойошҡанлыҡтары).
4. Дәрескә комплекслы маҡсат ниндәй (белем биреүсе, үҫтереүсе, тәрбиәүи)? Был маҡсаттарҙың тормошҡа ашырылыуына баһа бирергә, дәрестең һөҙөмтәлелеген нигеҙләргә.

5. Дәрестең маҡсатына ярашлы йөкмәткеһен, белем биреү (уҡытыу) формаларын һәм методтарын һайлап алыуҙы иҫбат итергә. Дәрестә белем биреүҙең һөҙөмтәләренә нигеҙләнеп, дәрестең төп этабын билдәләргә һәм уға тулы анализ яһарға.

6. Дәрес этаптарына материалдар һәм эштәр рациональ бүленгәйнеме? Этаптар араһындағы бәйләнештәр логик һаҡланамы? Дәрестең башҡа этаптарының төп этапҡа нисек эшләгәндәрен күрһәтергә.

7. Дәрес маҡсатына ярашлы дидактик материалдарҙың, техник уҡытыу сараларының, күргәҙмә әсбаптарҙың, таратма материалдарҙың һайлап алыныуын нигеҙләргә.

8. Уҡыусыларҙың белемдәрҙе үҙләштереүен тикшереү нисек ойошторолдо? Дәрестең ҡайһы этабында? Ниндәй формаларҙа һәм ниндәй методтар ярҙамында тормошҡа ашырылды? Уҡыусыларҙың белемен көйләү һәм төҙәтеү нисек ойошторолдо?

9. Дәрестәге психологик атмосфера.

10. Дәрес һөҙөмтәләрен нисек баһалайһығыҙ? Ҡуйылған бурыстар тормошҡа ашырылдымы? Әгәр үтәлмәһә, ни өсөн?

11. Үҙ эшмәкәрлегенең перспективаларын билдәләргә.

Коллегаларыбыҙҙың дәрестәрен ҡарағандан һуң, уға анализ яһағанда ниндәй күҙлектән сығып дәрес төҙөлөшөн һәм барышын, уҡытыусы менән уҡытыусыларҙың эшмәкәрлеген баһаларға?

ФГОС талаптарына ярашлы ойошторолған дәрескә анализ яһағанда иҫәпкә алына:

1. Дәрестең төп маҡсаты: белем биреүсе, үҫтереүсе, тәрбиәүи. Уҡытыусы тарафынан ҡуйылған маҡсаттарҙың ғәмәлгә ашырылыуы күҙәтеләме?

2. Дәресте ойоштороу: дәрес төрө, структураһы, этаптары һәм уларҙың логик эҙмә-эҙлеклеге һәм ваҡыт буйынса дөрөҫ бүленеше, дәрестең маҡсатына һәм йөкмәткеһенә ярашлы дөрөҫ төҙөлөшө.

3. Дәрестең ФГОС талаптарына тап килеүе.

3.1. Дәрестең яңы белемдәр алыу (үҙләштереү) һөҙөмтәләренә йүнәлтелгән булыуы.

3.2. Дәрес барышындағы эшмәкәрлектең уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу маҡсатында ойошторолоуы.

3.3. Белем биреү процесында заманса технологияларҙың ҡулланылыуы (проект, тикшеренеү, ИКТ һ.б.).

4. Дәрестең йөкмәткеһе.

4.1. Материалдың уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлектәренә ҡарап һайлап алыныуы. Уның балаларҙың психо-физиологик мөмкинлектәренә тап килеүе.

4.2. Дәрес йөкмәткеһенең программа талаптарына тап килеүе.

4.3. Теорияның практика менән бәйләнеше, уҡыусыларҙың тормош тәжрибәһен, уларҙың танып белеү әүҙемлеген һәм үҙаллылығын үҫтереү маҡсатында файҙаланыу.

4.4. Өйрәнелеүсе материалдың үтелгәндәр менән бәйләнеше, предмет-ара бәйләнештәр.

5. Дәресте үткәреү методикаһы.

5.1. Уҡыусыларҙың белемдәрен һәм эшмәкәрлек алымдарын актуалләштереү. Уҡытыусы тарафынан проблемалы һорауҙар ҡуйылыуы, проблемалы ситуациялар тыуҙырылыуы.

5.2. Уҡытыусы ниндәй методтар ҡулланды? Репродуктив һәм эҙләнеү (тикшеренеү) эшмәкәрлек төрҙәре күпме өлөш тәшкил итте? Сағыштырып ҡарағыҙ (“уҡы”, “һөйлә”, “ҡабатла”, “иҫеңә төшөр” – репродуктив характер, “иҫбат ит”, “аңлат”, “баһала”, “сағыштыр”, “хатаһын тап“ – эҙләнеү характерында.

5.3. Уҡытыусы эшмәкәрлеге менән уҡыусы эшмәкәрлегенең нисбәте. Үҙ аллы эштәрҙең күләме һәм характеры.

5.4. Уҡытыусы түбәндә һанап үтелгән ниндәй танып белеү методтарын ҡуллана (күҙәтеү, тәжрибә, мәғлүмәт эҙләү, сағыштырыу, уҡыу)?

5.5. Аралашыуҙа  диалог формалары ҡулланыламы?

5.6. Уҡыусыларҙың белемен файҙаланғанда стандарт булмаған ситуациялар тыуҙырылыуы.

5.7. Кире бәйләнеш булдырыуы.

5.8. Фронталь, төркөмләп, парлап һәм индивидуаль эшләү эш төрҙәрен аралаштырыу.

5.9. Дифференциаль уҡытыуҙы тормошҡа ашырыу. Төрлө кимәл уҡыусыларға айырым эш биремдәре булыуы.

5.10. Белем биреү саралары. Темаға һәм дәрес этабына ярашлы уларҙың маҡсатлы файҙаланыуы.

5.11. Күргәҙмә материалдарҙы файҙаланыу: күргәҙмә материал сифатында, эмоциональ мөхит тыуҙырыу өсөн, уҡытыу (белем биреү, белем алыу) белем биреү мәсьәләләрен хәл итеү өсөн (етерлек, артыҡ күп, урынлы, етерлек кимәлдә түгел).

6. Дәрестең психологик нигеҙҙәре.

6.1. Уҡытыусы тарафынан уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлектәре, мөмкинлектәре, ҡыҙыҡһыныуҙары иҫәпкә алыныуы.

6.2. Белем биреүҙең үҫтереүсе функцияһының тормошҡа ашырылыуы. Ҡабул итеү, иғтибар, күҙ алдына килтереү, фекерләү, хәтер, телмәр сифаттарын үҫтереү.

6.3. Дәрестең ритмы: төрлө дәрәжә ауырлыҡтағы материалдың алмашлап килеүе, уҡыу эшмәкәрлегенең төрлөлөгө.

6.4. Психологик паузаларҙың, күсөргәнеште сисеү алымдарының булыуы. Дәрестең эмоциональ атмосфераһы.

7. Өйгә эш: күләме, аңлайышлы инструктаж, дифференциация, һайлап алыу мөмкинлеге.

8. Уҡытыусының ижади ҡарашы, педагогик яңылыҡ индереүе.

Шулай уҡ бында дәрескә комплексла анализ яһау алгоритмын бирер үтеүҙе урынлы булыр тип таптыҡ.

**Дәресте комплексла анализлау**

Комплекслы анализ йөкмәткеһе төрлө булырға мөмкин, традицион рәүештә түбәндәге йүнәлештәр айырып ҡарала:

1. Уҡытыусы хәл иткән бурыстарҙы анализлау.

1.1. Йөкмәткелә һәм уҡытыусының эш методикаһында белем биреү принциптары нисек сағылыш таба һәм иҫәпкә алына;

1.2. Дәрестең дидактик һәм тәрбиәүи бурыстары ни дәрәжәлә ирешелде;

1.3. Дәрестең төрлө этаптарында уҡыусыларҙың танып белеү эшмәкәрлеге ни кимәлдә әүҙемләштерелде;

1.4. Уҡыусыларҙың белем алыуға яуаплы ҡараштарын тыуҙырыуға нимә булышлыҡ итте;

1.5. Уҡыусыларҙың белеме ни кимәлдә объектив баһаланды;

1.6. Теория менән практика бәйләнеше нисек ғәмәлгә ашырылды;

1.7. Йөкмәтке менән уҡытыу методтары уңышлы үрелеп барҙымы;

1.8. Дәрестә техник уҡытыу саралары ҡулланылдымы;

1.9. Уҡытыусы тарафынан уҡыусыларҙың йәш һәм индивидуаль үҙенсәлектәрен, мөмкинлектәрен һәм һәләттәрен иҫәпкә алыу өсөн нимәләр эшләнде.

2. Дәрестең тәрбиәүи әһәмиәтен анализлау.

2.1. Дәрестә алынған белемдәр ни кимәлдә тормошто аңларға булышлыҡ итте;

2.2. Дәрестә уҡыусыларҙы тәрбиәләүгә (эстетик, аң, хеҙмәт, физик) нимә булышлыҡ итте;

2.3. Уҡыусылар, уҡыусылар һәм уҡытыусы араһында ниндәй мөнәсәбәттәр урынлашты.

3. Уҡытыусы эшмәкәрлегенең мөмөкинлектәре һәм үҙенсәлектәре. Уҡытыусы шәхесенең һәм эшмәкәрлегенең һәләттәре һәм мөмкинлектәре нисек асылды.

3.1. Педагогик этика;

3.2. Тышҡы ҡиәфәт;

3.3. Класты күрә белеүе, уҡыусылар эшмәкәрлеген активлаштырыу һәм эшмәкәрлеккә мотивация тыуҙырыуы;

3.4. Уҡыусылар эшмәкәрлегендә типик хаталарҙы билдәләү һәм уларҙы төҙәтеү;

3.5. Уҡыусыларҙың һәм үҙенең эш һөҙөмтәләрен баһалауы;

3.6. Дәрес барышын тиҙ арала көйләп ебәрә белеүе.

4. Дәрестә уҡыусылар эшмәкәрлеген анализлау.

4.1. Уҡытыусы тарафынан уҡыусыларҙың тәрбиә, белем кимәлен, алдағы дәрестәр һөҙөмтәләрен иҫәпкә алыныуы;

4.2. Уҡыусының дәрестә эшмәкәрлеге;

4.3. Уҡыусыларҙың эшсәнлеге (фекерләй белеүе, үҙ аллы эшләй белеү, иптәштәренә ярҙам итеү, ҡыҙыҡһыныуҙары һүрелмәүе һ.б.);

4.4. Уҡыусыларҙың телмәр культураһы;

4.5. Уҡытыусың теорияны пратикала ҡуллана белеүе.

Үткәрелгән дәрескә анализ яһағанда икенсе төр критерийҙар системаһын да ҡулланырға мөмкин. Әммә һәр осраҡта ла анализ критерийҙары бөгөнгө дәрескә талаптар менән ауаздаш булырға, дәрестәрҙең юғары кимәлдә һөҙөмтәле итеп ойошторолоуына булышлыҡ итергә тейеш.

**Дәрес проекттары**

Миҫал өсөн дәрес өлгөләре биреп китеү урынлы булыр. Дәрес проекттары БР МҮИ тарафынан үткәрелгән Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 95 йыл тулыу уңайынан ойошторолған конкурс материалдары араһынан алынды.

Күкрәгемдән ҡоштар осорам: Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 95 йыллығына арналған конкурс материалдары йыйынтығы (дәрес өлгөләре һәм кластан тыш сарлар). – Өфө: БР МҮИ нәшриәте, 2014. – 508 бит.

*Дәрес проекты*

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ "ӨС ТАҒАН" ӘҪӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ

*Килсенбаева Резида Зиннур ҡыҙы,*
*Салауат ҡалаһы ҡала округы*

*"23-сө дөйөм белем биреү урта мәктәбе"*

Ҡулланылған алымдар: системалы эшмәкәрлекле һәм лингвомәҙәни йүнәлеш.

Дәрес төрө: һығымта яһау һәм системаға һалыу.

Ҡулланылған технологиялар: мини-тикшеренеү, проблемалы технология, компьютер технологияһы.

**Дәрестең маҡсаттары**:

1. Йөкмәткегә ҡарата. Повестағы герой-персонаждарҙы үҙ-ара оҡшатып һәм бер-береһе менән сағыштырып өйрәнеү.

2. Эшмәкәрлеккә ҡарата. Уҡыусыларҙы әҫәрҙең тексына анализ яһарға өйрәтеү. Монологик һәм диалогик телмәр, тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Сағыштыра, дөйөмләштерә белеү күнекмәләрен формалаштырыу. Ныҡлы әхлаҡ позицияһы, яҡшылыҡты, ысын матурлыҡты танып белеүгә ыңғай ориентир булдырыу.

Планлаштырылған һөҙөмтәләр.

Предмет буйынса: уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен белеү; тексҡа анализ яһай, әҫәрҙең идеяһын, проблематикаһын асыҡлай алыу; геройҙарға ҡылыҡһырлама биреү.

Предмет-ара бәйләнеш: әҙәбиәт, башҡорт теле, математика, һынлы сәнғәт, тәбиғәтте өйрәнеү, инглиз теле, рус теле.

Предмет-ара универсаль уҡыу эшмәкәрлеге.

Шәхескә йүнәлтелгән: белем алыуға, танып-белеү эшмәкәрлегенә ыңғай ҡарай, яңы белем-күнекмәләр алыуға, булғандарын камиллаштырыуға теләге бар.

Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итә, кәрәкле уҡыу ғәмәлдәрен, төрлө операцияларҙы планлаштыра (уҡытыусы һәм иптәштәре менән бергә йәки үҙ аллы), план буйынса эш итә.

Танып-белеү: схема һәм модель формаһындағы информацияны аңлай, төрлө мәсьәләләрҙе сисеүҙә билдә, йә символ менән бирелгән саралаҙы файҙалана.

Коммуникатив: ҙур булмаған монологик телмәр төҙөй, аныҡ бурыстарҙы күҙ уңында тотоп, парлап йәки төркөмдә уртаҡ эш башҡара.

Йыһазлау: компьютер, мультимедиа проекторы, таратма материал, дәрескә презентация, М. Кәримдең портреты, китаптары, видеояҙма «Өс таған» бейеүе, һүҙлектәр, дөйөм белем биреү мәктәбенең 5 класс уҡыусылары өсөн дәреслек-хрестоматия. Төҙөүсе-авторҙары: М.Б.

Юлмөхәмәтов, Ә.М. Сөләймәнов, М.Х. Иҙелбаев, З.И. ЯйҠарин. – Өфө: Китап, 2011.

ДӘРЕС БАРЫШЫ

**1-се этап. Эшмәкәрлеккә үҙбилдәләнеш.**

Ойоштороу моменты. (Маҡсат: балаларҙың дәрескә әҙерлеген тикшереү.) Уҡыусылар дәрескә кәрәкле материалды барлай.

Уҡытыусы. – Хәйерле көн, балалар! Бер-берегеҙгә ҡарағыҙ әле. Күҙгә-күҙ ҡарашҡас, һеҙҙә ниндәй хис-тойғолар тыуҙы?

Күҙҙәр яғымлы, көләс, тимәк, беҙҙе иғтибарлы, алсаҡ, яҡшы күңелле кешеләр уратып алған.

Аңланығыҙмы, кем араһында булаһың, шуларҙан күп нәмә тора. Ихлас кешеләрҙе күргәс, беҙгә рәхәт булып китә, күңелдә йылы тойғолар тыуа, яҡшы эштәр эшләге килә. Шулай итеп, алға, изге эштәргә!

Өй эшен иҫкә төшөрөү. (Маҡсат: ниндәй материал үҙләштерелеүен тикшереү.)

Уҡытыусы.

- Үткән дәрестә нимә өйрәндек?
- Ниндәй яңылыҡ белдегеҙ?
- Өйгә ниндәй эш бирелгәйне?
- Нисек уйлайһығыҙ, бөгөнгө дәрестә һеҙҙең маҡсатығыҙ ниндәй булырға тейеш?

Көтөлгән яуаптар:

- М. Кәримдең тормош юлын өйрәндек.
- Уның “Өс таған” повесын уҡып, һуғыштан һуңғы осорҙа йәшәгән тиңдәштәребеҙҙең уй-хыялдары тураһында белдек.
- Әҫәрҙең дәреслеккә инмәгән бүлектәрен уҡырға ине.
- Беҙгә автор һәм уның геройҙары тураһында күберәк белергә кәрәк.

«Саҡырыу» стадияһы. (Маҡсат: белем алыуға мотив тыуҙырыу.)

Уҡытыусы. Тексты уҡығыҙ. Слайд 1.

«Халҡым өсөн 20-се быуаттың символына әйләнгән М. Кәрим ябай совет кешеһе нимә кисергән, шуны кисереп йәшәне. Аслыҡ-яланғаслыҡ, һуғыш, һуғыштан һуңғы йылдар – бөтәһе лә уның яҙмышы, халыҡ яҙмышы.

Ғүмере буйы ябай кешеләрҙән башлап ил башлыҡтарына тиклем уның кәңәшенә, аҡыллы фекеренә мохтаж булды, шағирҙар үҙенең терәген, таянысын тапты. Ил башлыҡтары менән дә, Рәсүл Ғамзатов кеүек ҙур дуҫтары менән дә, ҡәләмдәштәре менән дә, уҡыусылары менән дә – һәр ваҡыт үҙе булып ҡалды, дөрөҫлөктө кешенең йөҙөн йыртмайынса аҡыллы итеп әйтә килде, бер кемгә лә яраҡлашманы. Сәбәләнергә яратманы, миңә лә, башҡаларға ла шулай кәңәш итте». (Ф. Туғыҙбаеваның хәтерләүҙәренән)

- Был юлдарҙың авторы һеҙгә танышмы?

- Ул - шағирә.

- «Аҡбуҙат» журналының баш мөхәррире булды.

Һүҙлек эше. «**Йөҙөн йыртмайынса**» һүҙбәйләнешен кем нисек аңлай?

- Хурламай, оятҡа ҡалдырмай, тупаҫ итеп түгел.

- Балалар, был өҙөктө уҡығас, Шағирҙы нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ?

- Олпат, етди.

- Ф. Туғыҙбаева уны ниндәй һүҙҙәр менән ҡылыҡһырлай?

- Әҙәпле, сабыр.

«Асҡыс һүҙ» алымы.

- М. Кәримдең холҡона хас булған асҡыс һүҙҙәрҙе әйтегеҙ.

- Символ, терәк, таяныс.

- Ниндәй һүҙҙәр бер нисә тапҡыр ҡабатлана?

- Аҡыллы, кәңәш.

Интерактив таҡтала эш: шағирҙы ҡылыҡһырлаған һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙырға.

«Халҡым өсөн 20-се быуаттың символына әйләнгән М. Кәрим ябай совет кешеһе нимә кисергән, шуны кисереп йәшәне. Аслыҡ-яланғаслыҡ, һуғыш, һуғыштан һуңғы йылдар – бөтәһе лә уның яҙмышы, халыҡ яҙмышы.

Ғүмере буйы ябай кешеләрҙән башлап ил башлыҡтарына тиклем уның кәңәшенә, аҡыллы фекеренә мохтаж булды, шағирҙар үҙенең терәген, таянысын тапты. Ил башлыҡтары менән дә, Рәсүл Ғамзатов кеүек ҙур дуҫтары менән дә, ҡәләмдәштәре менән дә, уҡыусылары менән дә – һәр ваҡыт үҙе булып ҡалды, дөрөҫлөктө кешенең йөҙөн йыртмайынса аҡыллы итеп әйтә килде, бер кемгә лә яраҡлашманы. Сәбәләнергә яратманы, миңә лә, башҡаларға ла шулай кәңәш итте».

Кластер төҙөү.




- Был эшкә дәрес аҙағында әйләнеп ҡайтырбыҙ.

**2 –се этап. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу**. (Маҡсат: уҡыусыны текст менән аңлы рәүештә эшләүгә йәлеп итеү) Көтөлгән һөҙөмтә: әҫәрҙең темаһын һәм идеяһын асыҡлау.

- Дәрес темаһын яҙып ҡуяйыҡ.

**М. Кәримдең «Өс таған» повесы»**

Дәрестең эпиграфы менән эш. Слайд 2.

*Тормошто мин оҡшатамын әкиәткә,*
*Әкиәттә мәңге тере хәҡиҡәткә:*
*Изгелектең баһаһы ҙур халыҡ өсөн,*
*Изгелек ҡыл ер, һыу һәм дә балыҡ өсөн.*
Рәшит Шәкүр.

«<u>Асҡыс һүҙ» алымы.</u>

- Рәшит Шәкүр шиғырындағы асҡыс һүҙҙе табығыҙ.
- «Изгелек».
- Бөгөнгө дәрестә һүҙ нимә тураһында барасаҡ?
- Беҙ повестағы герой-персонаждарҙың изге эш-ҡылыҡтары хаҡында һөйләшәсәкбеҙ.
- Дөрөҫ. Бына һеҙ эшкә маҡсат та ҡуйҙығыҙ – М. Кәримдең “Өс таған” повесы миҫалында “изгелек” һүҙе менән бирелгән концептты асыу, йәғни “изгелек” төшөнсәһенең әҫәрҙә нисек бирелеүен күҙәтеү.

“**Concept’s”** – латин теленән “төшөнсә” тип тәржемә ителә.

<u>Парлашып</u> <u>эшләү</u>. Парталаш күршегеҙ менән кәңәшләшеп, “Нимә ул изгелек?” һорауына яуап бирегеҙ.

Яуаптарҙы тыңлайбыҙ.

- Яҡшы, балалар. Ә хәҙер аңлатманы һүҙлектәрҙән эҙләйек.

<u>Һүҙлектәр менән эш.</u>

**Изгелек** - кеше өсөн саф күңелдән эшләнгән яҡшы эш; яҡшылыҡ. (Башҡорт теленең һүҙлеге, 1993,368-се б.)

**Изгелек** – доброта, благое дело, хороший поступок.

<u>Интерактив таҡта менән эш</u>. Уҡыу:

**Изгелек** – кешегә үҙенең эшләнгән эштәрен баһаларға ярҙам иткән әхлаҡи аңының норматив-баһалау категорияһы. Изгелек – башҡорттарҙың иң яҡшы сифаттарының береһе. Халҡыбыҙҙа үҙ теләгең менән эшләнгән изгелек кенә изгелек булып һанала. Донъяла изгелек ни тиклем күберәк булһа, йәшәүҙәре шул тиклем үк еңелерәк, күңеллерәк. Изгелек – насар тойғоларҙы юҡҡа сығарыусы, мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыусы, матурлыҡҡа, сафлыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәүсе Хоҙай тарафынан юғары баһаланған эш.

Башҡорт тел картинаһында «изгелек» концептының йөкмәткеһе «яҡшылыҡ», «яҡтылыҡ», «матурлыҡ» концепттары менән берлектә асыла.

(Л.Х. Сәмситова. «Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары», 2010, 140-сы б.)

**3-сө этап. Белемде һәм оҫталыҡты актуалләштереү** (Маҡсат: әҙәбиәт һәм башҡа дәрестәрҙә алған белемдәрҙе иҫкә төшөрөү.)

Уҡытыусы. Әҫәрҙең исеменә иғтибар итегеҙ. Ул һеҙгә нимәне хәтерләтә? Был һанды тағы ҡайҙа осратҡанығыҙ бар?

Көтөлгән яуаптар:

- Әкиәттәрҙә.

- Башҡортостандың халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллиндың "Өс ҡатын" исемле картинаһы бар.

- Рус рәссамы Виктор Васнецов "Өс батыр" тигән һүрәт эшләгән.

- "Өс таған" тип аталған бейеүҙе беләбеҙ.

- "Өс сусҡа балаһы" тигән инглиз әкиәте бар.

"Лингвистик уйын" (предмет-ара бәйләнеш

- "Өс сусҡа балаһы" башҡа телдәрҙә нисек яңғырай?

Көтөлгән яуаптар: Инглизсә - "Three Little Pigs".

– "Три поросенка".

- "Three", "три" һүҙҙәре ниндәй башҡорт һүҙе менән ауаздаш?

-Терәү.

- Русса нисек була?

- Опора, подставка.

- Уның синонимдарын беләһегеҙме?

Көтөлгән яуаптар:

- Терәү, таяныс, аяҡ, таған

Уҡытыусы. Башҡорт халҡында "Өс таған таймаҫ" тигән мәҡәл бар. Ни өсөн шулай тигәндәр?

Көтөлгән яуаптар:

- Беҙ дуҫтар тураһында уҡыныҡ. Тимәк, "таған" – дуҫты, ярҙамсыны аңлата. Күмәк булһаң, ҡыйынлыҡтарҙы еңеүе еңелерәк.

Тәржемә. Өс таған таймаҫ, тайһа ла аумаҫ. И поскользнется, да не перевернется.

Уҡытыусы. Эйе, әкиәттәрҙә лә бит "икәүҙән өсәү яҡшы " тигән әйтем осрай. Әйтегеҙ әле, әкиәт батырҙарын нимә берләштерә?

Уҡыусылар: Уртаҡ маҡсат. Уртаҡ хыял.

Уҡытыусы. Ниндәй?

Көтөлгән яуаптар:

"Ҡамыр батыр" әкиәтендә халыҡты һылыу ҡыҙ ҡиәфәтендәге Дейеүҙән, "Аҡъял батыр"ҙа кешеләрҙе һыуһыҙ интектергән Иргәйелдән ҡотҡарыу. "Урал батыр"ҙа ...

Уҡытыусы. Был эштәрҙе ниндәй ҡылыҡ тип атап була?

Көтөлгән яуаптар:

Яҡшылыҡ. Ярҙам. Изгелек.

Проблемалы һорау (таҡтала).

**Әкиәттәрҙә һәр ваҡыт Изгелек Яуызлыҡты еңеп сыға. Ә тормошта?**

Был һорауға яуап биреүе еңел түгел. Шуның өсөн М. Кәримдең повесына анализ яһарға тәҡдим итәм. Әҫәре менән беҙгә ниндәй кәңәш бирә, нимәгә өйрәтә икән ул?

**4–се этап. Проблеманы хәл итеү өсөн кәрәкле белемде эҙләү**. **:** (Маҡсат: аңлауҙы тиҙләтеүсе биремдәр үтәү)

Көтөлгән һөҙөмтә: үҙ фекереңде булдырыу һәм нигеҙләй белеү күнекмәләрен үҫтереү.

«Герой-персонаждарҙы таны» уйыны. Слайд 3.

- Кемдәр тураһында һүҙ бара?

Һарыҡ көтөүсеһе - …

«Башлыҡ» - …

«Юлбарыҫ тиреһе ябынған батыр» - …

«Өлгө» - …

«Ҡыр кәзәһе» - ….

- Ниндәй геройҙарҙың образдары, һеҙҙеңсә, иң сағыу һәм иҫтә ҡалырлыҡ?

Көтөлгән яуаптар:

- Шәрифулла, Ғабдулла, Айҙар, Вәзир, доктор, Гөлнур, Нәғимә инәй, Мөхәммәт ағай, Яҡуп.

- Әҫәрҙәге яҡшы эш башҡарған кешеләрҙе иҫкә төшөрөгөҙ.

Яуаптар.

- Балалар, повеста тик һәйбәт кешеләр тураһында ғына һөйләнеләме ни? Кемде насар тип атап була?

- Күлгә суртан ебәргән кешене.

- “Яҡшы», «насар»- мәғәнәләре буйынса былар ниндәй һүҙҙәр?

- Антонимдар.

- Ә теге кешене тағы нисек ҡылыҡһырлап була?

Көтөлгән яуаптар:

- Яуыз. Мәкерле. Ҡара йөрәк.

- Мәғәнәләре буйынса былар ниндәй һүҙҙәр?

- Синонимдар.

- “Ҡара йөрәк” ниндәй мәғәнәлә?

- Күсмә.

- Ә беҙҙең дуҫтарҙы нисек атап була? “Аҡ йөрәкле” типме?

- “Аҡ күңелле” тип.

“Төҫлө ассоциация” алымы.

*Уҡытыусы.* Әгәр һеҙ рәссам булһағыҙ, был эпизодты һүрәтләр өсөн ниндәй төҫтәр ҡулланыр инегеҙ?

Иллюстрациялар менән эш (предмет-ара бәйләнеш). Слайд 4.

Берећендә Күлгә-суртан-ебәргән-кеше, икенсећендә “Өс таған” командаһы ағзалары төшөрөлгөн.

Бирем: Уҡыусылар **Күлгә-суртан-ебәргән-кешене** бер төҫ, ә **“Өс таған” командаһы ағзаларын** икенсе төҫ менән уратып алырға тейеш, мәҫәлән, ҡара һәм алһыу.

- Ни өсөн шулай эшләнегеҙ? (Яуаптар.)

<u>Һығымта.</u> “Өс таған” командаһы ағзалары – ыңғай геройҙар, улар изгелек ҡылыусы саф йөрәкле батырҙарҙы һынландыра. Күлгә суртан ебәргән кеше – ҡара көстәрҙе һынландырыусы кире образ.

- Автор бында ниндәй алым ҡулланған?
- Ҡаршы ҡуйыу.

<u>Яңы төшөнсә менән эш</u>.

**Антитеза** – ҡапма-ҡаршы төшөнсәләрҙе һәм образдарҙы сағыштырыуға ҡоролған әҙәби-стилистик алым. (“Башҡорт теленең һүҙлеге”, 63-сө бит.)

- Ә беҙҙең батырҙарҙы нимә берләштерә?
- Кирәмәтте ҡотҡарыу хыялы.
- Кем уларҙың йөрәгенә осҡон һалды?
- Көтөүсе Шәрифулла.
- Уны изге күңелле тип атап буламы? Ни өсөн?

<u>Һығымта.</u> Шәрифулла ағай балаларҙың күңеленә изгелек орлоғо һала: бәләгә тарыған Кирәмәткә ярҙам кәрәклеген аңғарта.

- Шулай итеп, кемдәр улар – Кирәмәтте ҡотҡарырға ниәтләүселәр?
- Шәрифулла, Ғабдулла, Айҙар, Вәзир, Яҡуп.
- Беҙҙең батырҙар бишәү булып китте. Ни әйтерһегеҙ?
- Таған̣да терәү, нисәне терәһәң, шул саҡлы була. Терәүсенең үҙ ҡулында ул. Теләһәң, унды терә.
- Был кемдең һүҙҙәре?
- Айҙарҙыҡы.

<u>Кластер төҙөү.</u>

Ғабдулла — Шәрифулла

Кирәмәт

Айҙар — Вәзир — Яҡуп

**5-се этап**. **Белемде тышҡы телмәрҙә беренсел нығытыу**. (Маҡсат: алған белемдәрҙе нығытыу).

Көтөлгән һөҙөмтә: әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләй алыу.

- Артабан ваҡиғалар нисек үҫешә?
- Балалар Кирәмәтте ҡотҡарыу юлын эҙләй башлай.

- Быға нисек ирешмәксе булалар?

<u>Ҙур булмаған сығыш.</u>

**Ял минуты.** Видеояҙмала «Өс таған» бейеүе. Көй ыңғайына хәрәкәттәр яһау.

<u>Дәрестең эпиграфын иҫкә төшөрөү</u>. Слайд 2.

*Тормошто мин оҡшатамын әкиәткә,*
*Әкиәттә мәңге тере хәҡиҡәткә:*
*Изгелектең баһаһы ҙур халыҡ өсөн,*
*Изгелек ҡыл ер, һыу һәм дә балыҡ өсөн.*
Рәшит Шәкүр.

- Эпиграфҡа күҙ һалығыҙ. Ни әйтерһегеҙ?

- Шиғырҙағы һүҙҙәр нәҡ беҙҙең геройҙар тураһында һымаҡ.

- Халыҡ, ер, һыу, балыҡ хаҡына улар ниндәй изгелек ҡыла?

<u>Фронталь</u> <u>эш.</u> Балалар геройҙарҙың изге ғәмәлдәре хаҡында төрлө миҫалдар эҙләйҙәр. Араларынан теләгәндәре сығыш яһай. (Маҡсат: уҡыусыларҙың анализ, синтез һәм һығымта яһай белеү күнекмәләрен, фекерләүен һәм телмәрен үҫтереү.)

**Шәрифулла ағай** балаларға мауыҡтырғыс легенда һөйләй.

**Ғабдулла** Гөлнурҙы һөҙгәк үгеҙҙән ҡотҡара.

**Айҙар** аҡыллы кәңәштәр бирә. Мәҫәлән, командаға башлыҡ һайларға, балыҡ үрсетергә. Ул шулай уҡ ҡылыстан тотҡан балыҡты һалып торор өсөн мурҙа үрә.

**Вәзир** ҡоҙоҡҡа төшкән бесәй балаһын ҡотҡара. Яҡупҡа рогатка бүләк итә. Уны ишкәк ишергә өйрәтә. Бата башлағас, һыуҙан һөйрәп сығара. Больницала ятҡан Ғабдуллаға өләсәһе исеменән хат яҙа.

**Яҡуп,** рогатканан атып, Ғабдуллаға ташланған үгеҙгә һөжүм итә. Нәғимә инәйгә ейәненән килгән хатты ҡысҡырып уҡый.

**Доктор** Ғабдулланың һынған ҡулын, ҡабырғаларын дауалай.

**Гөлнур** йүгереп йөрөп ағаһы ҡушҡан йомоштарҙы үтәй.

**Мөхәммәт ағай** Бөйөк Ватан һуғышында батырлыҡ күрһәтеп һәләк була.

**Нәғимә инәй** ейәнен батыр атайға лайыҡлы булырға өйрәтә.

**Айҙарҙың әсәһе** Ғабдуллаға рәхмәт уҡый.

**Гөлйемеш апай** менән**Ҡорбанбикә еңгә** уға күстәнәс ебәрә.

Уҡытыусы. Балалар, әҫәрҙә исемдәре әйтелмәгән персонаждар ҙа бар. Уларҙың ниндәй ҡылыҡтарын изге тип атап була?

- Бәләгә тарыған Ғабдулланы кырандас менән Ҡултабан больницаһына илтеүсе ағай- **юлсы.**

- Ауырыуҙы күрергә тип больницаға китеп барыусы малайҙарҙы машинаһына ултыртып алыусы егет -**шофер**.

<u>Парлашып эшләү.</u>

Иҫкәрмә: балаларҙың алдында әҫәрҙең тулы варианты булған китаптар –М. Кәрим. Өс таған. Повестар, хикәйә. – Өфө: Китап, 1990. – 192 бит.

Бирем: өҙөктәрҙең төп фекерен билдәләргә.

1. “Дан кәпәс түгел” бүлегенән *“Нәғимә инәй: Улай булһа, тыңла. Батыр үлһә, улына ҡылысы ҡала”* тигән урындан *“кешеләр хайран ҡалырлыҡ эштәр башҡарһаң икән”* тигән һүҙҙәргә тиклем.

2. *Беҙ – «Өс таған» тигән отряд - шунда балыҡ ебәреп үрсетергә булдыҡ. Был сер. ...Әсәйҙәр әрләрҙәр. Бер әрләрҙәр ҙә бер туҡтарҙар. Ҙур эш башҡарған кешеләрҙе элек тә аңлап еткермәгәндәр.*

«Күршеңде тикшер» алымы.

Төп фекерҙәр: *1. Бына үҙең, атайыңа лайыҡлы булып, ил һоҡланырлыҡ, кешеләр хайран ҡалырлыҡ эштәр башҡарһаң икән. 2. Ҙур эш башҡарған кешеләрҙе элек тә аңлап еткермәгәндәр.*

**Һығымта.** «Өс таған» отряды ағзалары үҙҙәрен ҙур, яуаплы, һуғышта һәләк булған батырҙарға лайыҡлы, ил һоҡланырлыҡ, кешеләр хайран ҡалырлыҡ эш башҡара тип һанаған.

**6-сы этап. Үҙ-үҙеңде тикшереү һәм үҙ аллы эш (эске телмәр):** бирелгән план буйынса төркөмдәрҙә эшләү. (Маҡсат: сағыштырыу һәм оҡшашлыҡты таба белеү күнекмәләре булдырыу.)

Таратма материал менән эш (балаларға мәҡәлдәрҙең яртышар өлөшө һәм әҫәрҙән өҙөктәр яҙылған карточкалар таратыла). Маҡсат: логик фекерләүҙе үҫтереү.

Биремдәр.

А) “Мәҡәлдәрҙең 2-се өлөшөн тап.”

Изгелек эшлә лә һыуға һал, халыҡ белер… . ... …. кәкре ҡул менән эшләмәйҙәр. Тура эште … . Ҡылыс - йән ҡыя торған яман ҡорал, … . . Йөрөмәгән … . … халыҡ белмәһә, балыҡ белер. … ҡалҡан – йән һаҡлай торған яҡшы нәмә. . йығылмаҫ.

Б) Был әйтем-мәҡәлдәрҙең ниндәй өҙөктәргә тура килеүен билдәләргә:

1. Әле мәктәпкә лә йөрөмәйҙәр ине, буғай. Бер саҡ урманда кәпәс сөйөп уйнағанда, Ғабдулланың кепкаһы иң өҫтәге ҡоро ботаҡҡа эленеп ҡалды. Күпме таяҡ, таш ырғыттылар улар, ләкин кепканы бәреп төшөрә алманылар. Ә ағас башына үрмәләргә Вәзирҙән башҡа берәүҙең дә һоло етмәне. Кепканы ул менеп алды. Төшкән саҡта яҙа баҫып, үҙе лә ҡолап төштө. Хатта шыңшып та ҡараманы ул.

2. Вәзир һикереп үк торҙо: «Ниңә уны тотоп торорға? Мин Ҡылыстағы балыҡсыларҙың балығы ҡайҙа торғанын беләм. Эңер төшкәс, бер түгел, ике күнәк сәлдереп килтерәм мин һеҙгә. Тик һалып торорға мурҙа ғына булһын».

3. «Беләһеңме, Айҙар, - тине Ғабдулла, - Кирәмәт емерелмәһен дә., ти. Ә кешеләргә бер күл тултырып балыҡ үрсетеп ебәрһәк, ул да ярап ҡалыр. Иң тәүҙә беҙгә мурҙа үрергә кәрәк. Тотҡан балыҡты шунда һалырбыҙ».

4. Имеш, борон-борон заманда, Уралды илбаҫарҙарҙан һаҡлағанда, бәһлеүәнгә уҡ тейгән. Ул гөрһөлдәп ергә ауған. Уң ҡулындағы ҡылысы бер яҡҡа, һул ҡулындағы ҡалҡаны икенсе яҡҡа барып төшкән. Ҡалҡан төшкән ерҙә йылы күл, ҡылыс төшкән ерҙә һалҡын күл ҡалҡҡан.

Үҙ-үҙеңде тикшереү. Слайд 5.

Ҡылыс - йән ҡыя торған яман ҡорал, ҡалҡан – йән һаҡлай торған яҡшы нәмә – 4-се өҙөккә.

Изгелек эшлә лә һыуға һал, халыҡ белер; халыҡ белмәһә, балыҡ белер – 3-сө өҙөккә.

Тура эште кәкре ҡул менән эшләмәйҙәр – 2-се өҙөккә.

Йөрөмәгән – йығылмаҫ- 1-се өҙөккә.

Төркөмдәрҙә эш.

Уҡытыусы төркөмдәргә эш бүлеп бирә: 1-се төркөм Айҙар, 2-сеһе Ғабдулла, 3-сөһө - … тураһында һөйләргә әҙерләнә.)

Көтөлгән һөҙөмтә: һәр персонаждың үҙенә генә хас сифаттарын билдәләй белеү.

План. Слайд 6.

Повестағы персонажды күҙ алдына килтереү.

Тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләү.

Холоҡ сифаттары.

Уның башҡаларға мөнәсәбәте.

Башҡаларҙың уға мөнәсәбәте.

**Сығыштар.** (Маҡсат: үҙ фекереңде аныҡ итеп, ҡыйыу рәүештә әйтеп биреү, публика алдында һөйләргә өйрәнеү.)

«Кем кемгә әйтә?» алымы.

«Һинән рәт сығасаҡ. Тик әлегә таҫыл яғы ғына самалыраҡ. Ә рәт сығасаҡ».

- «Таҫыл» һүҙен нисек аңлайһығыҙ?

- Эштең ыңғайын белеү, ҡулайлашыу.

**Һол, оҫол, таҫыл** – синонимдар. Мәғәнәһе: булдыҡлылыҡ. Тәржемәһе: умение, сноровка.

Яуаптар: Вәзир Яҡупҡа әйтә.

Уҡытыусы. Балалар, тағандың «терәүҙәр»енән миңә иң оҡшағандары ошо малайҙар булды. Беләһегеҙме, ни өсөн?

Яуаптар.

Һығымта. Әҫәрҙә улар үҫештә бирелгән.

**Индивидуаль эш**: Вәзир һәм Яҡуп образдары буйынса мини-проект әҙерләргә. Әҫәрҙең аҙағындағы «үҫеште» күрһәтергә.

План.          Слайд 7.

Холоҡ сифаттары.

Унының башҡаларға мөнәсәбәте.

Башҡаларҙың уға мөнәсәбәте. Холҡон
үҙгәртеүсе сәбәптәр. Үҙенә
генә хас сифаттары. Башҡа
геройҙар менән уртаҡ сифаттары.

**7-се этап. Алған белемде проект эшмәкәрлегендә сағылдырыу:** сағыштырыу ҡылыҡһырламаһы төҙөү, таблица тултырыу. (Маҡсат: үҙләштереү дәрәжәһен тикшереү.)

Көтөлгән һөҙөмтә: сағыштыра, дөйөмләштерә алыу күнекмәләрен формалаштырыу.

**Интерактив таҡта менән эш**: балалар үҙҙәре төҙөгән таблица менән таҡталағыны сағыштыра, өҫтәй).

«Үҙ-үҙемде тикшерәм» алымы.

Уртаҡ һыҙаттар һәм айырма. Слайд 8.

| **Әҫәрҙең башында** | |
|---|---|
| **Яҡуп** | **Вәзир** |
| Рогатканан ата, йөҙә, ишкәк ишә белмәй. Ағас башына үрмәләмәй, ҡаянан ҡаяға һикермәй. Ҡыйыуһыҙ. | Мәргән ата. Шәп йөҙә. Оҫта балыҡсы. Ишкәк ишә белә. Ағас башына етеҙ үрмәләй. Ҡыйыу. |
| Ғаиләһе етеш тормошта йәшәй. Әсәһенең һүҙенән сыҡмай. | Ғаиләһе наҡыҫ йәшәй. Үҙ аллы. |
| “Яҡшы”ға өлгәшә. Тасуири уҡый. Тыйнаҡ, тәртипле, бер ҡатлы. | Уртаса уҡый. Матур яҙа. Йор һүҙле, шаян, хәйләкәр. |
| Әсәйҙәр һәм өләсәйҙәр уны башҡаларға өлгө итеп ҡуя. Малайҙарҙан ситкә тибәрелеп йөрөй. Тиҫтерҙәре унының менән аралашмай. | Яҡуптың әсәһе уны яманлап һөйләй. Малайҙар араһында абруйы бар. Тиҫтерҙәре менән татыу. |
| Иркә малай. Йомшаҡ характерлы, сибек, оҫолһоҙ. | Әрһеҙ малай. Физик яҡтан ныҡ, сыныҡҡан, сыҙам, булдыҡлы. |
| **Әҫәрҙең уртаһында** | |
| **Яҡуп** | **Вәзир** |
| Рогатканан атырға, йөҙөргә, ишкәк ишергә, ағас башына үрмәләргә, ҡаянан ҡаяға һикерергә өйрәнә. Ҡыйыу була бара. Әсәһенә үҙ фекерен еткерә. | Хилаф эш ҡыла (Шәрифулланың бәкеһен, әсәһенең аҡсаһын “сәлдерә”). |
| Малайҙар уға ышаныс белдерә. | Дуҫтарының ышанысын юғалта. |
| Отрядҡа ҡабул ителә. | Отрядтан сығарыла. |

**Әҫәрҙең аҙағында**

| **Яҡуп** | **Вәзир** |
|---|---|

| | |
|---|---|
| Үҙенең фекерен ҡыйыу рәүештә яҡлай ала. | Үҙенең хатаһын аңлай. Уны намыҫлы эш менән төҙәтә. |
| Тиҫтерҙәре араһында абруйы арта. | Отрядҡа яңынан ҡабул ителә. |
| **Уртаҡ сифаттары** | |
| йомартлыҡ | |
| батыр булғы килеү | |
| малайҙар менән аралашырға теләү | |
| тәбиғәткә һөйөү | |
| киң күңеллелек | |
| яҡшылыҡҡа ынтылыу | |

**7-се этап. Рефлексия**. (Маҡсат: балаларҙың нимә үҙләштереүен, ҡайҙа ҡыйынһыныуҙарын, уларҙың иғтибарын нимәләр йәлеп иткәнен белеү.)

- Дәрес башында ниндәй маҡсат ҡуйғайныҡ?

*«М. Кәрим повесындағы герой-персонаждарҙың изге эш-ҡылыҡтары хаҡында һөйләшәсәкбеҙ» тигән.*

- Был маҡсатҡа ирешер өсөн ни эшләнек?

- Әҫәргә анализ яһаныҡ.

- Нимә үҙләштерҙегеҙ?

- Аҡыл эйәһе М. Кәрим беҙгә ниндәй һабаҡ биргәнен. - Әҫәр нимәгә өйрәтә? Ниндәй булырға ярамай?

Көтөлгән яуаптар: мәкерле, битараф, көнсөл, хыянатсыл, алдаҡсы, уғры, ҡурҡаҡ, ялҡау, …

- Һеҙгә нимәне билдәләүе ҡыйын булды?

- Вәзирҙе яҡшы кешеләр рәтенә индереү.

- Ни өсөн?

Ул алдаша, урлаша.

- Ул бит быны яуыз ниәттән эшләмәй.

- Иҫбат итегеҙ.

- Ул йомарт, киң күңелле малай.

- Нигеҙләгеҙ.

*«Вәзирҙең кемгәлер яҡшылыҡ эшләгеһе, кемделер ҡыуандырғыһы килде. Ул салбары кеҫәһендәге һалҡын ғына тос нәмәне ҡапшап ҡараны».*

- Мин Яҡупты ла изге эштәр генә эшләй тип әйтә алмайым.

- Ни өсөн?

- Ул әсәһен алдай.

- Ул алдағыһы килеп түгел, ә әсәһе аңламаҫ тип ҡурҡҡанға алдай.

- Ни өсөн ул шул аҙымға бара?

- Уның да батыр булғыһы килә.

- Дәлилләгеҙ.

<u>Өҙөктәр уҡыу.</u>

1. *Ултыр! – тип бойорҙо Башлыҡ Яҡупҡа. - Һинең батыр булғың киләме?*

*- Килә лә… Нисек булырға һуң?*

*2. Гел ситкә тибәрелеп йөрөгән малайҙың үҙ тиҫтерҙәре араһында булғыһы, бергә уйнағыһы, шаярғыһы килде. Шуға күрә ул, сер һаҡларға ант итеп, үҙе теләп «Өс таған»ға инде».*

Проблемалы һорауға әйләнеп ҡайтыу.

Дәрес башында беҙ “*Әкиәттәрҙә һәр ваҡыт Изгелек Яуызлыҡты еңеп сыға. Ә тормошта?*” тигән һорау ҡуйғайныҡ. Яуаптарҙы тыңлайыҡ.

Һығымта. Яуызлыҡ еңә алмай. Изгелек эшләүселәр күберәк.

Әҫәрҙә телгә алынған изге ғәмәлдәрҙе иҫкә төшөрөү, яуаптарҙы интерактив таҡталағы схема менән сағыштырыу (үҙконтроль).

Тиҙ ярҙам” күрһәтеү

Бәләнән ҡотҡарыу

Ауырыуҙың хәлен белеү

Тәбиғәтте һаҡлау

Кәңәш биреү

Тыуған илде һаҡлау

Бүләк биреү

Һыуға батҡан кешене ҡотҡарыу

Йөҙөргә, ишкәк ишергә өйрәтеү

Күстәнәс әҙерләү

Оло кешегә ҡысҡырып хат уҡыу

Оло кеше исеменән хат яҙыу

- Һеҙгә «Өс таған»дан ниндәй герой нығыраҡ оҡшаны? Ни өсөн?

- Нисек уйлайһығыҙ: авторҙың үҙ геройҙарына мөнәсәбәте нисек?

- «Өс таған таймаҫ, тайһа ла аумаҫ» мәҡәлен иҫкә төшөрәйек. Ҡайһы ерҙә «таған» ауа яҙҙы?

- Кире сифаттары ла булған Вәзирҙе автор нисек һүрәтләй? Ни өсөн уның тураһында “алданы” тип түгел, ә “шыуҙырҙы” тип яҙа? “Урланы” һүҙен ниндәй маҡсаттан сығып “сәлдерҙе” менән алмаштыралар? “Кәкре ҡул” һүҙбәйләнешен нисек аңлайһығыҙ?

- Дәрес башында М. Кәрим тураһында иҫтәлек уҡығайныҡ. Факиһа Туғыҙбаева уны нисек ҡылыҡһырлай?

*«Дөрөҫлөктө кешенең йөҙөн йыртмайынса аҡыллы итеп әйтә килде».*

Уҡытыусы. Әҫәре менән ул үҙенең ошо сифатына тоғро ҡала. Балаларҙы юмор менән, кинәйәләп әйтеп тәрбиәләй, яҡшыны ямандан айырырға өйрәтә.

- Яҡшы яҡҡа үҙгәрер өсөн кешегә ниндәй шарттар кәрәк?

- Үҙеңдең теләгең генә етәме?

Яуаптар.

- Башҡаларҙың иғтибары, дуҫтарҙың ғәҙел тәнҡите, ышанысы, ихлас ярҙамы, хаталарҙы төҙәтә белеүе, урынлы кәңәш, ғәфү ит белеү.

Унын өсөн дуҫтарыңа таянырға, өлгө булырҙайынан үрнәк алырға, мохтаждарға терәк булырға кәрәк.

<u>Интерактив</u> <u>таҡта</u> <u>менән</u> <u>эш</u>. Дәрес башында уҡылған яҙмаға әйләнеп ҡайтыу:

**Изгелек** – кешегә үҙенең эшләнгән эштәрен баһаларға ярҙам иткән әхлаҡи аңының норматив-баһалау категорияһы. Изгелек – башҡорттарҙың иң яҡшы сифаттарының береһе. Халҡыбыҙҙа үҙ теләгең менән эшләнгән изгелек кенә изгелек булып һанала. Донъяла изгелек ни тиклем күберәк булһа, йәшәүҙәре шул тиклем үк еңелерәк, күңеллерәк һанала. Изгелек – насар тойғоларҙы юҡҡа сығарыусы, мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыусы, матурлыҡҡа, сафлыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәүсе Хоҙай тарафынан юғары баһаланған эш.

Башҡорт тел картинаһында «изгелек» концептының йөкмәткеһе «яҡшылыҡ», «яҡтылыҡ», «матурлыҡ» концепттары менән берлектә асыла. (Л.Х. Сәмситова. «Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары», 2010, 140-сы б.)

- Балалар, бөгөн изгелек тураһында күп һөйләштек, ә иң төп изгелек ҡылыусыны атаманығыҙ? Кем һуң ул?

- Эйе, **автор** үҙе. Уны тағы нисек ҡылыҡһырлап була?

<u>Кластерға яңы һүҙҙәр өҫтәү</u>.




<u>Уҡытыусы</u>. М. Кәрим дә кешенең тышҡы матурлығын унын матур ҡылыҡтары: эскерһеҙлеге, ярҙамсыллығы, ихласлығы менән бәйләй.

Ф. Туғыҙбаеваның хәтерләүҙәренән: Слайд 9.

«Үҙенең әҫәрҙәрендә М. Кәрим халыҡтың тетрәүҙәр, юғалтыуҙар аша рухы камиллаша барыуын бәйән итә. «Һеҙҙең ауылда гел матур кешеләр йәшәйме ни?» тигән һорауға ул: «Бәлки, ысынбарлыҡта улар бик матур ҙа түгелдер, ә мин уларҙы үҙем һүрәтләгәнсә күрәм», - ти. Эйе, унын геройҙары үҙенең ихласлығы менән яраттыра. Шағир тыуҙырған һәр әҫәр кешенең кешелеклелеген данлай, донъяның бөтмәҫ-төкәнмәҫ матурлығына күҙҙе аса».

- Шуға өҫтәп нимә әйтә алаһығыҙ?

- «Өс таған» - яҡшылыҡ, изгелек тураһындағы әҫәр.

- Ул һеҙгә оҡшанымы?

- Ҡайһы өлөшө нығыраҡ оҡшаны?

- Миңә әҫәрҙең аҙаҡҡы бүлеге оҡшаны. Йәл, ул дәреслеккә индерелмәгән.

Һайланма уҡыу. «Алда Кирәмәт. Бер нисә көндән дүрт терәүгә таянған «Өс таған» унын күленә йән индерер өсөн юлға сығыр. Ә юлға бер сыҡҡан кеше маҡсатына барып етмәй кире боролмай ул. «Өс таған» да кире боролмаҫ, ә бейек һәм бөйөк тауҙың түбәһенә күтәрелер. Йәнә йылдар үтер. Был малайҙар егет булып етер. Шул саҡ улар Кирәмәттән дә бейегерәк түбәләргә күтәрелерҙәр. Ерҙе генә түгел, күкте лә биҙәрҙәр улар. Һеҙ быға ышанаһығыҙмы? Мин ышанам».

- Был юлдар менән автор нимә әйтергә теләй?

- Ул балаларға ышаныс белдерә.

- Әҫәре менән китап уҡыусыларҙың күңелен үҫтерә.

- Йәш дуҫтарын изге эштәргә әйҙәй.

Һығымта. Кирәмәтте яулау – тау түбәһенә менеү генә түгел, ә холҡондағы кире сифаттарҙы бөтөрөү, насар ҡылыҡтарҙы еңеү икән ул.

Математик мәсьәлә. “Кем тиҙерәк?” алымы. (предмет-ара бәйләнеш).

- Был әҫәрҙә нисәнсе йылдар һүрәтләнә? (Ул дата Ғабдулланың хатында күрһәтелгән.) Был ваҡиғаларҙан һуң нисә йыл ваҡыт үткән?

2014 – 1950=64.

- Ошо әҫәрен әҙип 1962 йылда яҙған. Быға нисә йыл үткән?

2014 – 1962=52.

- Тормош үҙгәргәнме?

- Ниндәй проблемалар һаман бар?

Һығымта. Әҫәр 21-се быуат балалары өсөн дә ҡыҙыҡлы, сөнки унда намыҫлылыҡ, ғәҙеллек, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, тәбиғәткә һәм кешеләргә миһырбанлы мөнәсәбәт, туған халҡыңа, унын тарихына һәм ауыз-тел ижадына һөйөү кеүек мәңгелек ҡиммәттәр тураһында һүҙ бара.

Прогнозлау” алымы.

- Балалар, повестың дауамы булыуын теләйһегеҙме? Уны үҙегеҙ яҙа алаһығыҙ.

- Мәктәп тамамлаған малайҙарҙы нисек итеп, ниндәй һөнәр эйәләре тип күрәһегеҙ? Өйҙә “Ун йылдан һуң...” тигән фараз-күҙаллау төҙөгөҙ.

**Өй эше.** (Уҡытыусы өсөн маҡсат: балаларҙың үҙ аллы һәм ижади эшен ойоштороу. Уҡыусылар өсөн маҡсат: алған белемдәрен үҙ аллы ҡулланып, бәйләнешле текст төҙөй алыу.)

1. Мәжбүри- бөтәһе өсөн дә:

а) “Ун йылдан һуң...” тигән фараз-күҙаллау төҙөгөҙ (яҙма).

б) әҫәрҙә осраған әйтем-мәҡәлдәрҙе, тапҡыр-һүҙҙәрҙе ятлағыҙ.

2. Ихтияри – үҙегеҙгә оҡшаған эпизод буйынса һүрәт төшөрөгөҙ.

**Баһалау**. ( Уҡыусылар өсөн маҡсат: үҙеңә һәм башҡаларҙың эшенә баһа ҡуйырға өйрәнеү).

- Һеҙ бөгөнгө эшегеҙҙән ҡәнәғәтме? Үҙегеҙгә ниндәй билдә ҡуйыр инегеҙ? (үҙбаһа)

*Дәрес алдынан уҡытыусы балаларға “алтын балыҡтар”тараттҡайны. Дәрес аҙағында уҡыусылар, иптәштәренең яуаптарына ҡағылышлы һүҙҙәр әйтеп, “балыҡтарҙы» бер-береһенә бирә (бер- береһен баһалау).*

Уҡытыусы. Миңә лә һеҙҙең төплө яуаптарығыҙ оҡшаны. Сығыш, үҙ аллы эш, карточкалағы биремдәрҙең үтәлешен күҙ уңында тотоп, һеҙгә шундай баһалар ҡуям: (уҡытыусының баһалауы).

**Йомғаҡлау һүҙе**. Мостай Кәрим һабаҡтарын иҫтә тотоп, изге ғәмәлдәр ҡылып йәшәгеҙ. Һау булығыҙ!

***Дәрес проекты***

## М. КӘРИМДЕҢ «ӨС ТАҒАН» ПОВЕСЫН ӨЙРӘНЕҮ

*Зәкирова Нәзирә Назим ҡыҙы,*
*Учалы ауылы Башҡорт гимназияһының*
*Өргөн филиалы*

**Маҡсат:** Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тормошо һәм ижады тураһында үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү, өҫтәлмә мәғлүмәттәр биреү. Яҙыусының “Өс таған” повесы менән танышыу. Уҡыған әҫәрҙе тормош менән бәйләргә өйрәтеү. Уҡыусыларҙың тәбиғәт, дуҫлыҡ тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр тураһындағы белемде, уҡыу техникаһын камиллаштырыу. Уҡыусыларҙың грамматика буйынса белемдәрен, һүҙлек менән эшләү күнекмәләрен нығытыу. Уҡыусыларҙың һүҙлек, телмәр һәләтлектәрен байытыу, тел байлығын арттырыу.

Уҡыусыларҙың уҡыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен, һүҙлек эше аша башҡорт һүҙҙәренең мәғәнәләренә иғтибарын, ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү.

М. Кәримдең ижадына ихтирам, тәржемә эштәре аша һүҙ тойғоһо, тел тойғоһо тәрбиәләү.

**Дәрес төрө:** яңы материал менән танышыу дәресе.

**Уҡытыу методы:**күрһәтеү-аңлатыу, эҙләнеү методтары.

**Уҡытыу алымдары:** әңгәмә, һорау-яуаптар, мәҡәл әйтеү, карточкалар менән эш, таҡтала һәм дәфтәрҙә эш, һүҙлек менән эш, тәржемә итеү, уҡытыусының тасуири уҡыуы, уҡыусыларҙың сылбырлы уҡыуы, ИКТ ҡулланыу, 4 уҡыусының алдан тема буйынса һүрәт төшөрөүе, ял минуты, дидактик уйын, ижади эш.

**Предмет буйынса һөҙөмтәләр:**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим тормошо һәм ижады тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр биреү. Уҡыу техникаһын камиллаштырыу.

**Метапредмет буйынса һөҙөмтәләре:** дәрестә ҡуйылған маҡсатты аңлау, уны тормошҡа ашырырға тырышыу, дәреслектән кәрәкле мәғлүмәтте таба белеү, үҙ эшеңде, парыңдың эшен тикшерә алыу, билдәне белдерә торған һүҙҙәрҙе телмәрҙәҡулланыу, уҡыған әҫәрҙе тормош менән бәйләй белеү, һорауҙарға яуап биреү, үҙ белемеңде баһалау.

**Шәхси һөҙөмтәләр:** туған телебеҙҙең матурлығын аңлау.

**Йыһазландырыу:** Мостай Кәримдең портреты, ижадына бағышланған китаптар, һүҙлектәр, уҡыусыларҙың тема буйынса төшөрөлгән һүрәттәре күргәҙмәһе, компьютер, презентация материалдары, тест һорауҙары яҙылған карточкалар, таҡта, аҡбур.

## Дәрестең киңәйтелгән план-конспекты

| Эш төрҙәре | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Уҡыусы эшмәкәрлеге | Йыһаз |
|---|---|---|---|
| **Психологик инеш** | | | |
| Психологик кәйеф шарттары булдырыу Уңыш ситуацияһы тыуҙырыу | У. Һаумыһығыҙ, балалар! Йылмайығыҙ, бер-берегеҙгә яҡшы һүҙҙәр әйтегеҙ! "а" хәрефенә башланған яҡшы һүҙҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.<br>Б. Аҡыллым, афарин һ.б. | Дәрес алдынан уҡыусылар түңәрәккә баҫыу, кәйефен күтәреү.Эшкә өндәү.<br>Ҡулдарҙы өҫкә күтәреү.<br>Бер-береңә ҡарау.<br>Уҡытыусыға баш эйеү. | А/яҙма (күңелле башҡорт халыҡ көйө яңғырай) |
| | У. Хәйерле иртә! Бер-беребеҙгә ҡул биреп күре-шәйек. Бөгөн һеҙ бигрәк тә яғымлы күренәһегеҙ. Афа-рин, дуҫтарым! Әйҙәгеҙ, бөтә донъяны ла сәләмләйек әле.<br>Б.Хәйерле иртә, ағастар!<br>Хәйерле иртә, ҡоштар!<br>Хәйерле иртә, тәбиғәт! | | |
| | У. Афарин! Әгәр һеҙ һәр көндө бөтә доньяны сәләм-ләһәгеҙ, яратһағыҙ, изге уй-лы, һәйбәт кеше булып үҫер-һегеҙ. Был эштә мәктәптә ал-ған белемдәрегеҙ ҙә ярҙамға килер. Шуға күрә дәресте башларға рөхсәт итегеҙ, ултырығыҙ! | Ултырғыстарға ултырыу. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Дәрес алды шиғыры уҡыу | У. Ә хәҙер, һеҙҙең менән һүҙҙәр донъяһына сәйәхәткә сығабыҙ. Алда беҙҙе был ил-дең ҡыҙыҡлы туҡталыш-тары көтә. Сәйәхәт итергә беҙгә ете төҫтәге тажлы сәскә ярҙам итер. Тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтәйек:<br>Б. Ос һин, ос һин, ос, тажым,<br>Сит илдәргә ос, тажым,<br>ә ергә төшөү менән<br>Беҙ әйткәнсә эшлә һин!<br>Беҙҙе “белем иле батшалығына” илт!<br>У. Афарин! | Күмәкләп шиғырҙың юлдарын ҡабатлау. | |
| **Мотивация** | | | |
| Мәҡәл уҡыу | У. Балалар, таҡталағы мәҡәл-дең мәғәнәһен аңлатығыҙ.<br>Б. 1-се алым – мин нәмәне белмәйем,<br>2-се алым – ысулды үҙем табам. | Таҡталағы мәҡәлде уҡыу. | Таҡтала “Тыры шыу бушҡа китмәҫ” мәҡәле |
| **Уҡыу мәсьәләһен булдырыу** | | | |
| Артикуляцион апаратты көйләү | У. Хәҙер таҡтаға ҡарайыҡ әле. Бында тиҙәйткес яҙыл-ған. Уның менән ни эшләйек?<br>Б. Уны уҡыйыҡ, тиҙ һәм дөрөҫ итеп әйтергә өйрәнеү күнекмәһе үткәрәйек. | Орфоэпик, артикуляцион күнегеүҙәр менән телде, телмәрҙе көйләү. | Аҡбур, таҡтала яҙылған тиҙәйткес |
| Тиҙәйткес | У.1. һыуыҡ һыу һалҡын була, һыуыҡ килһә, һыу туңа.<br>2. Үгеҙегеҙ үҙегеҙҙеке, мөгөҙө үгеҙегеҙҙеке.<br>Үгеҙегеҙҙең мөгөҙөн үҙегеҙ һындырғас,үгеҙегеҙҙән күрмәгеҙ,үҙегеҙҙән күрегеҙ. | Дежурҙы тыңлау.<br>2 тапҡыр ҡабатлау. | |
| Артикуляцион күнегеүҙәр. | У. “Ҡушҡанды үтә” тигән уйынды уйнайбыҙ. | Дежурҙы тыңлау. | |
| | Б. Эйе. Тор, ултыр, дәреслегеңде ас, китабыңды яп.һ.б. | Уның артынан ҡабатлау | |

| Дәрестең маҡсатын, йөкмәткеһен билдәләү. Актуалләштереү. | | | |
|---|---|---|---|
| Башҡарыласаҡ эштәрҙе күҙаллау | У. Таҡтала яҙылған шиғырҙы уҡыйбыҙ. Кем тарафынан әйтелгән был һүҙҙәр ?<br>Б. Мостай Кәрим.<br>У. Ни өсөн ул тип уйлайһығыҙ?<br>Б. Сөнки тағы эргәлә М. Кәримдең портреты, китаптары тора.<br>У. Тимәк, бөгөн дәрестә нимә эшләрбеҙ?<br>Б. Мостай Кәримдең тормош юлын, ижадын иҫкә төшөрәбеҙ.<br>Б. Яңы мәғлүмәт алабыҙ, үтелмәгән әҫәре менән танышабыҙ.<br>Б. Дәфтәрҙә яҙма эш башҡарырбыҙ.<br>У. Бик күп эштәр башҡарырға теләйһегеҙ икән. Ул эштәрҙе башҡарып, һеҙ нимәгә өйрәнерһегеҙ?<br>Б. Белемебеҙҙе арттырырбыҙ.<br>Б. Белгәнебеҙҙе иҫкә төшө-рөрбөҙ, нығытырбыҙ.<br>Б. Башҡорт телендә арала-шырбыҙ.<br>Б. Һүҙлек запасын артты-рырбыҙ.<br>У. Эйе, балалар, беҙ бөгөн һеҙҙең менән М. Кәримдең тормош юлын, ижадын иҫкә төшөрөрбөҙ, “Өс таған” повесы менән танышырбыҙ, һүҙ байлығын, фекерләү ҡеүәһен арттырырбыҙ, белемдәрҙе тикшереп, нығытырбыҙ. | *Иғтибарҙы таҡтаға йүнәлтеү.*<br>Таҡтаға эленгән күргәҙмә материалға, дәреслектең алдан әҙерләп, асып ҡуйылған битенә таянып башҡарыласаҡ эштәрҙе күҙаллатыу. | «Күп нәмәнән уңдым. Рәхмәт һеҙгә, Хәйерле төн һеҙгә, үткәндәр Эйе, уңдым. Күп нәмәнән уңдым. Минән уңды микән бүтәндәр ?»<br>–тигән шиғыр юлдары яҙылған.<br><br>М.Кәрим дең портреты М Кәрим ижадына бағышла нған китаптар күргәҙмә һе, дәреслек |
| Эштә ҡыйынлыҡ | У. Ни өсөн автор әҫәрҙе “Өс таған” тип атаған? | Уҡытыусы һорауҙарына яуап биреү. | М.Кәрим дең “Өс таған” |

| | | | |
|---|---|---|---|
| урынын табыу | Әҫәрҙең исеменең мәғәнәһен аңлатығыҙ.<br>Б. Сөнки әҫәр өс малай ту-раһында. Таған һымаҡ бер-береңә терәк булыу, ярҙам итеү.<br>У. Төп геройҙар төрлө ваҡи-ғалар барышында үҙҙәрен ниндәй яҡтан күрһәтәләр?<br>Б. Ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, әммә ҡайһы бер осраҡта ҡурҡыу, үҙ-үҙеңә ышанмау-санлыҡ осрай.<br>У. Төп геройҙарға сағыш-тырмаса характеристика би-регеҙ. Исемдәрен атап китегеҙ.<br>Б. Ғабдулла, Вәзир, Айҙар. Ғабдулла - бик ҡыйыу,зирәк малай, атаһы һымаҡ батыр булырға теләй.<br>Вәзир - ул ябай,бер ҡатлы малай, ысын дуҫ, батыр йө-рәкле. Яҡуп - баштан өй ма-лайы булһа ла, аҙағында ул үҙ-үҙендә көс таба, башлыҡ ҡушҡан һынауҙарҙы үтә.<br>Айҙар - ул Ғабдулла һымаҡ “башлы” малай, ләкин Вәзир һымаҡ ҡысҡырып сыҡмай мин дә мин тип, тыныс ҡына уйлап эш итә.<br>У. Афарин! Эште дауам итеп Өй эшенә туҡталайыҡ, өйгә бирелгән эштәрҙе тикшереп үтәйек. | Уҡыусылар төп геройҙарға характеристика бирәләр, китаптан табып уҡыйҙар, миҫалдар килтерәләр, үҙҙәренең уй-фекерҙәре менән бүлешәләр.<br>Төрлө яуаптар әйтәләр.<br>Ҡыйынлыҡ урынын һәм сәбәбен билдәләү.<br><br>Һүрәттәр буйынса 3-4 баланан таҡтаға сығып нимә төшөргәндәрен тасуири итеп һөйләтеү. | повесы, дәреслек. Уҡыусыл арҙының «Күл буйында » темаһын а төшөрөл гән һүрәттәр е |
| **Ғәмәли эштәр** | | | |
| Үтелгәнде иҫкә төшөрөү. Яңы мәғлүмәт биреү | Яҙыусы М. Кәрим тураһында бер нисә һорау биреү, тор-мош юлын иҫкә төшөрөү, яңы мәғлүмәттәр биреү:<br>У. Кем ул М. Кәрим? | Һорауҙарға яуап биреү, әңгәмәләшеү. | М. Кәрим портр, китаптар күргәҙмә һе |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Б. Башҡорт халыҡ яҙыусыһы, шағир, һ.б. яуаптар.<br>У. Ул ҡайҙа тыуған?<br>Б. Төрлө яуаптар бирәләр.<br>У. Балалар өсөн ниндәй әҫәр-ҙәр яҙған?<br>Б. Шиғырҙар, повестар, әкиәттәр һ.б.<br>У. Мостай Кәрим 1919 йыл-дың 20 октябрендә Шишмә районы Келәш ауылында тыуа. Ишле ғаиләлә, Оло инәһе тәрбиәһендә, эш һө-йөүсән һәм инсафлы бала булып үҫә. Тыуған ауылында тулы булмаған урта мәктәпте тамамлағас, ике йыл - Өфө педагогия рабфагында, һуңы-нан БГПИ-ла уҡый. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән һуғышҡа китә.<br>Халҡы алдындағы һәм әҙәбиәттә күрһәткән киң даирәле хеҙмәттәре өсөн ул ике тапҡыр Ленин ордены, ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Халыҡтар дуҫлығы Почет билдәһе ордендары менән бүләкләнә. Башҡор-тостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелә. СССР дәүләт премияһы, Станислав-ский исемендәге дәүләт премияһы һәм С. Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Социалистик Хеҙ-мәт Геройы, Ленин преми-яһы лауреаты. М. Кәримдең ижады күп яҡлы. Уның балалар өсөн дә, ололар өсөн дә төрлө жанрҙарҙа ижад иткән бик күп китабы | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | донъя күрҙе. М. Кәримдең пьеса-лары башҡорт драматур-гияһының алтын фондын тәшкил итә.<br>Беҙгә таныш драма әҫәре нисек атала?<br>Б. «Айгөл иле» драмаһын уҡыныҡ.<br>У. Шулай, афарин. Ә бөгөн беҙ унның "Өс таған" повесы менән танышасаҡбыҙ.<br>У. Дәфтәргә числоны, эш төрөн, теманы яҙайыҡ.<br>У. Ниндәй күңелле<br>Хәреф белеүе!<br>Шул хәрефтәрҙән<br>Һүҙҙәр теҙеүе! | | |
| **Уҡыу ситуацияһының исемлеге** | | | |
| Текстың исеменә иғтибар итеү | У. Балалар,әҫәрҙә һүҙ нимә тураһында барасаҡ?<br>Б. Өс дуҫ малай, уларҙың изге эштәре тураһында. | Һорауға яуап биреү. | Презентация, интерактив таҡта, |
| Һүҙлек эше | У. Эйе. Тексты уҡығансы һүҙлек менән танышып үтәйек.<br>У. Уларҙы һүҙлек дәфтәренә яҙырға кәрәкме?<br>Б. Кәрәк.<br>У. Ни өсөн?<br>Б. Иҫтә ҡалдырыу өсөн.<br>Б. Аңларға еңел булһын өсөн.<br>У. Бөтә һүҙҙәрҙең дә тәржемәһе бармы?<br>Б .Юҡ.<br>У. Нимә эшләргә һуң?<br>Б. Һүҙлектән ҡарарға кәрәк.<br>У. Һүҙлектәрҙе асығыҙ. Эште башланыҡ.<br>**ялтырап ята** – лежит блестя<br>**күл сите** – берег озера<br>**Ҡуйы** – густой<br>**өйөрөлөү** – вертеться, крутиться<br>**аулайҙар** – ловят | Һүҙлек һүҙҙәрен дәфтәргә яҙыу Һорауҙарға яуап биреү. | Һүҙлек һүҙҙәре таҡтала яҙылған, Һүҙлек китабы |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **мүкле** – мшистый<br>**Ҡая** – скала, утёс<br>**Ҡарағас** – лиственница<br>**бөркөт** – орел | | |
| Тексты тасуири уҠыу | У. Афарин, балалар! Иҫкә төшөрөгөҙ әле, беҙ бөгөн Мостай Кәримдеңниндәй әҫәренән өҙөк менән танышасаҠбыҙ?<br>Б. "Өс таған".<br>У. Мин уҠый башлайыммы, әллә берәй уҠыусымы?<br>У. Йәгеҙ әле, булмаһа, үҙем уҠып таныштырайым һеҙҙе был өҙөк менән.<br>У. Текст нимә тураһында?<br>Б. Бөркөтлө ауылы, ҠалҠан күле, Ҡылыс күле, Күк-рәктау, бейек Кирәмәт башы, һарыҠ көтөүсеһе Шәри-фулла, Гөлнур, Ғабдулла, Вәзир, Айҙар<br>Б. Тәбиғәт тураһында тип әйтергә лә була, шунан төп геройҙарға күсеп китә.<br>У. Тексты нисек уҠырға кәрәк?<br>Б. Тәбиғәт күренешенә һоҠланып уҠырға кәрәк.<br>У. Тәржемәһен белмәй тороп, һоҠланыу хистәрен күрһәтеп буламы?<br>Б. ЮҠ. | УҠыусыларҙың яуаптары.<br><br>УҠытыусының өлгөлө уҠыуы.<br><br>УҠыусыларҙың тыңлауы, дәреслек буйынса Ҡарап барыуҙары, һорауҙарға яуап биреү. | |
| Тексты тәржемә итеү | У. Нимә эшләргә һуң?<br>Б. Тәржемә итергә кәрәк.<br>У. Ниндәй тәржемә итеүҙе алабыҙ?<br>Б. Парлап.<br>У. Эшкә керештек.<br>У.Кайһы парҙы тыңлайбыҙ? Һин Вәсиләнең тәржемәһе менән ризамы? Ни өсөн?<br>Үҙ парың менән нисегерәк тәржемә иттең?<br>Тәржемәселәргә ниндәй билдә Ҡуйырға була? | Һүҙлек һүҙҙәрен Ҡулланып, парлап тәржемә итеү, теүәллек индереү. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Ял минуты | У. Арып та киттегеҙ кеүек.<br>У. Әйҙәгеҙ, күңелле туғайҙа ял итеп алайыҡ.<br>Мин ҡурайҙы яратам,<br>Ҡулдарымды уйнатам,<br>Бармаҡтарым уйнайҙар,<br>Улар һис тә талмайҙар.<br>Хәҙер беҙ ял итәбеҙ һәм тағы ла яҙабыҙ. | Хәрәкәттәр яһау. | |
| Текстың йөкмәткеһе буйынса әңгәмә | У. Ниндәй ул Бөркөтлө ауылы?<br>Б. Донъялағы иң матур ауылдарының береһе.<br>У. Тауҙары ниндәй, урмандары?<br>Б. Ҡуйы,бейек.<br>У. Тәбиғәте ниндәй ?<br>Б. Ҡарағас,ҡайын,ҡарағай урмандары менән ҡапланған тауҙар. Ике яғында ҙур күл-ҠалҠанкүл, Ҡылыскүл. Урмандарҙа беләк йыуан-лығы көпшәләр үҫә, аҡлан-дарҙа турғай башы ҙурлығы еләктәр бешә.<br>У. Шул урынды дәреслектән табып уҡығыҙ әле. | Әңгәмә ҡороу.<br>Дәреслектән һөйләмде табып уҡыу. | Дәреслек |
| | У. Повестҡа һәм ундағы төп геройҙарға мөнәсәбәтегеҙ?(оҡшаны/оҡ шаманы)<br>У. Иҫтә ҡалған эпизодты һөйләү. Ни өсөн иҫтә ҡалға-нын аңлатыу.<br>У. “Өс таған”әҫәре менән яҙыусы ни әйтергә теләгән? Хәҙерге заман менән бәйләп аңлатығыҙ.<br>У. Төп геройҙар нисек һүрәтләнгән? Әҫәрҙән табып уҡығыҙ.<br>У. Өҙөктө нисек уҡыйбыҙ?<br>Б. Сылбырлап. (Парлап, һ.б. варианттар). | Уҡыусыларҙың өҙөктө тасуири уҡыуы.<br><br>Әҫәрҙән геройҙарҙың һүрәтләнеүен табып уҡыу. | |

| | | |
|---|---|---|
| Күҙҙәр гимнастикаһы | Алыҫҡа ҡарайбыҙ.<br>Яҡынға ҡарайбыҙ.<br>Өҫкә ҡарайбыҙ.<br>Аҫҡа ҡарайбыҙ.<br>Уң яҡҡа ла ҡарайыҡ.<br>Һул яҡҡа ла ҡарайыҡ. | Ҡулдарҙы алға һоноп бармаҡтар осона ҡарау.<br>Устарҙы күҙҙәрҙе эргәһенә ҡуйып ҡарау.<br>Ҡулдар өҫтә, бармаҡ остарына ҡарау.<br>Ҡулдар аҫта, бармаҡ остарына ҡарау.<br>Ҡулдарҙы йәйеп уң ҡулдың бармаҡ остарына ҡарау.<br>Ҡулдарҙы йәйеп, уң ҡулдың бармаҡ остарына ҡарау. |

**Нығытыу**

| | | | |
|---|---|---|---|
| Үҙ аллы эш | У. Ял да иттек. Эште дауам итәйек әле. Карточкала һөйләмдәр бирелгән. Нимә эшләргә кәрәк?<br>Б. Һөйләмдәрҙе грамма-тик тикшереү. | Карточкалар менән эшләү. | Карточкала яҙылған һөйләмдәр. |

**Рефлексия**

| | |
|---|---|
| У. Дәрестең маҡсаты ниндәй ине?<br>Маҡсатыбыҙға ирештекме?<br>Нимә белдек?<br>Кемдәр бик һәйбәт эшләне?<br>Кемдәр үҙҙәрен маҡтай алалар?<br>Кем иптәшен маҡтарға теләй? Ни өсөн?<br>Кем бөгөн алған белемен киләсәктә ҡуллана алам, бөтәһен дә аңланым тип уйлай, йәшел түңәрәк күтәрегеҙ.<br>Кемгә әле белемдәрен нығытырға кәрәк, һеҙ һары түңәрәк күтәрегеҙ.<br>Кемгә бөгөн бик ауыр булды, кемгә ярҙам кәрәк ҡыҙыл түңәрәк күтәрегеҙ.<br>Бик тырышып эшләнегеҙ. Рәхмәт!<br>Баһаларҙы ҡуйырға ярҙам итегеҙ әле, балалар! | Күмәкләп баһалар ҡуйыу. |

**Өй эше**

| | | |
|---|---|---|
| | Бөгөнгө дәрестә ишеткән һүрәтләү сараларын ҡулланып, “Минең иң яҡын дуҫым” тигән темаға инша яҙырға. | |

**Йомғаҡлау**

| | | |
|---|---|---|
| | У. Дуҫтарым! Һеҙ бөгөн бик күп нәмәләрҙе белдегеҙ, иҫкә төшөрҙөгөҙ, дуҫ булып эштәрҙе башҡарҙығыҙ. Рәхмәт! Киләһе дәрестә осрашҡанға тиклем һау булығыҙ! | |

## ҺЫҒЫМТА

Шулай итеп, белем биреү системаһында яңы стандарттарҙы ғәмәлгә индереү шарттарында уҡытыусынан дәресте проектлауға һәм үткәреүгә стандарт талаптарына ярашлы яңылыҡтар индереү талап итела. Заман дәрестәре уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген ойошторoу аша уларҙа предмет һөҙөмтәләренән тыш метапредмет һөҙөмтәләрҙе лә формалаштырыуҙы күҙаллай. Уҡытыусылар алдында әле был технологияларҙы төплө үҙләштереү бурысы тора. Әйтелгәндәр традицион дәрестәрҙе бөтөнләй ғәмәлдән сығарыу тигәнде аңлатмай, һәр уҡытыусы йылдар буйы туплаған тәжрибәһенән ваз кисергә тейеш түгел. Балаларҙың ижади һәләттәрен, үҙ аллы белем алыу күнекмәләрен үҫтергән, үҙ фекерен әйтергә һәм граждан лыҡ позицияһын яҡларға өйрәткән традицион алымдар һәм уларҙы тормошҡа ашырырға булышлыҡ иткән формалар, бәхәсһеҙ, бөгөн дә актив ҡулланылырға хаҡлы һәм, хатта, беҙ уларҙы ҡулланырға бурыслы ла. Бөгөн уҡытыусы заман талаптарына ярашлы үҙ эш системаһын барлап сығырға, дәрестәрҙең, алым һәм формаларҙың эффектлығын, уҡыусылар эшмәкәрлеген ойошторoуҙың яңы мөмкинлектәрен эҙләргә бурыслы.

Уҡытыусы үҙ дәрестәренең ижадсыһы булып ҡала. Яңы стандарттар белем биреүҙең һөҙөмтәләренә яңы талаптар ҡуйып, яңы идеялар, ижади асыштар өсөн юл аса. Әгәр уҡытыусы элекке методтарҙың һәм эш алымдарының яңы стандарттар талаптарын тормошҡа ашырыуына булышлыҡ итеүенә ышана икән, уларҙан бөгөн баш тартырға кәрәкмәй ҙә. Уларға бары яңы шарттарҙа заман технологиялары менән бер рәттән ҡулланылыш табырға кәрәк.

## *Кулланылган әдәбиәт*

1. Формирование универсальных учебных действий в основной школе: от действия к мысли. Система заданий: пособие для учителя / Под ред. А.Г. Асмолова. - М.: Просвещение, 2010. - 159 с.:

2. Аксенова Н.И. Системно-деятельностный подход - как основа формирования метапредметных результатов/СПб.: Реноме, 2012.

3. 2. Андрианова Г.А. Целеполагание и рефлексия как метапредметные виды учебной деятельности//Интернет-журнал «Эйдос». -2011. - №8.

4. Бондарева Н.А. Технологические карты конструирования уроков /М.: Просвещение, 2012. - 175 с.

5. Миронов А.В. Как построить урок в соответствии с ФГОС. – Волгоград: Учитель, 2013. – 174 с.

6. Петерсон Л.Г. Механизмы формирования универсальных учебных действий на основе дидактической системы деятельностного метода обучения "Школа 2000..." / Л. Г. Петерсон// Муниципальное образование: инновации и эксперимент. - 2011. - № 3. - С. 17-23. - Библиогр.: С. 23.

7. Чернобай Е.В. Технология подготовки урока в современной образовательной среде (Серия «Работаем по новым стандартам») – М.: Просвещение, 2012.

8. Гришова Е.А. Современный урок в условиях введения ФГОС нового поколения [Электронный ресурс] /Е.А. Гришова // http://wiki.ippk.ru/images/1/1f/Гришова Е.А., Горобец М.А.

9. Гурьянова О.Н. Изучение информатики в условиях ФГОС.// Материалы XII Южно-Российской межрегиональной научно-практической конференции-выставки "ИТО-Ростов-2012" [режим доступа: http://rostov.ito.edu.ru/2012/section/200/95181/]

10. Иванова М.Ю. Требования к современному уроку в условиях введения ФГОС [электронный ресурс] //http://nsportal.ru/nachalnaya-shkola/materialy-mo/trebovaniya-k-sovremennomu-uroku-v-usloviyah-vvedeniya-fgos

11. Кирьянова Е.А. Новые подходы к планированию уроков в рамках введения ФГОС второго поколения [электронный ресурс] //http://www.profistart.ru/ps/blog/35203.html

12. Утякаева Ф.А. Требования к современному уроку в условиях введения ФГОС [электронный ресурс] //http://nsportal.ru/shkola/obshchepedagogicheskie-tekhnologii/library/trebovaniya-k-sovremennomu-uroku-v-usloviyah

13. Хабарова В.В. Требования к современному уроку в условиях введения ФГОС [электронный ресурс] //http://sukhodol-sch1.ucoz.ru/metod kop doc/metod nedelya/Habarova.pdf

14. Якушина Е.В. Подготовка к уроку в соответствии с требованиями ФГОС. //Справочник заместителя директора школы, №10, 2012 г. http://gymnasium43.ucoz.ru/obraz process/doclad.pdf

1. Хәҙерге заман башҡорт теле дәресенең структураһы......... 3
2. **Дәрескә үҙанализ һәм анализ яһау.......................................** 11
3. Дәрес проекттары.................................................................. 15
4. Һығымта………………………………………………... 40
5. Ҡулланылған әҙәбиәт............................................................ 41

**Йөкмәткеһе**

Составитель:
*Ахат Галимович Ильмухаметов*

ПРОЕКТИРОВАНИЕ СОВРЕМЕННОГО УРОКА
БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА
*(на башкирском языке)*

*Методические рекомендации*

Компьютерная верстка и макет:
Р.И. Рыскужина

Подписано к печати 05.10.15.
Бумага писчая. Формат 60х84 1/16.
Гарнитура Times New Roman.
Отпечатано на ризографе.
Усл. печ. л. 2,8. Уч.-изд. л. 2,9.
Тираж 300 экз. Заказ 092.
Цена свободная.

Издательство Института развития образования РБ
450005, Уфа, ул. Мингажева, 120.
rio_biro@mail.ru